ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-3 март - апрель (буранай - алағарай) 2015

№ 13 (639)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иркен

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Тел булмаһа, илең дә юҡ!**



3,6

**Боронғо ҡаланы...**



күргәҙмәлә күрергә була

4

**Айыҡлыҡҡа юлды...**



үҙ-үҙенде енеүҙән башла

7

**Тамашасынды...**



буфет тураһында онотторорлоҡ итеп уйна

11

**ТВ-программа** 14


***Мин төрки халҡының бер тармағы булған "башгирд" тип аталған бер ҡәүемдең илдәрендә булдым. Улар төрки ырыуғтарының бик һуғышсан бер ҡәбиләһе. (Әхмәт ибн-Фаҙлан).***

***Башҡорттар үҙенсәлекле телдә һөйләшә, скифтарса кейенә, емештәр менән туҡлана... (Геродот).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Халыҡҡа төрлө шикле сифаттағы алкоголле эсемлектәр, дарыу төнәтмәләре һатыу менән куптән шөғөлләнә алыпһатарҙар - ошо мәсьәлә яңыраҡ ҡына БР Хөкүмәте ултырышында тикшерелде. Был күренеш һеҙгә танышмы?

***Марат ИШМӨХӘМӘТОВ, халыҡ табибы, яҙыусы:*** Был афәттән күпме кеше ҡырыла, тағы күпмеһе башын һалыр - уйлауы ла ҡурҡыныс, сөнки суррогат менән сауҙа кәмеү түгел, киреһенсә, сәскә ата. Спиртлы, йәғни алкоголле эсемлектең ниндәйен генә алып ҡараһаң да, уларҙың береһе лә аҙыҡ-түлек иҫәбенә инмәй, уларҙың бөтөнөһө лә - ағыу. Алкоголь, тимәк, этил спирты, ул бер үк ваҡытта көслө наркотик та. Һирәкләп кенә эсәһеңме, әллә эскегә башкөлләй бирелгәнһеңме, рөхсәт ителгәнде магазиндан һатып алаһыңмы, әллә алыпһатарҙан арзанға алаһыңмы - ахыр сиктә, һөҙөмтә бер: организмға этанол инеп оялай икән, унан ҡотолормон, тимә. Айырма, бәлки, тик шунда ғыналыр: суррогат организмды тиҙ, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ағыулай. Алкоголь суррогаты рәүешендә ҡулланылыусы спиртлы шыйыҡсалар ассортименты бик ҙур: аптека төнәтмәләренән алып, һәр төрлө техник шыйыҡсалар, көнкүреш химияһы препараттары, ҡайһы бер косметик саралар һ.б. Бындай шыйыҡсалар менән ағыуланыу баш мейеһе зарарланыу, ҡан әйләнеше боҙолоу, аңды юғалтыу, кома хәленә төшөү кеүек билдәләр менән башлана. Бындай нәмәне эскән иргеттең тиҙ арала ирлек көре юҡҡа сыға. Һирәкләп эскәндәр ҙә хатта ҙур хәүеф сығанағына әүерелә: уларҙан донъяға зәғиф балалар ярала. Эскесе аңында "зыянһыҙ" иҫәпләнгән самогон шулай уҡ киң таралған суррогат алкоголизмына ҡарай. Самогондағы сивуха майы - үлемесле ағыу сығанағы. Этил спиртының ағыу кимәлен бер берәмек тип алған хәлдә, сивуха майында ул күрһәткес 19-ға, ә фурфуролда 83-кә тиң. Самогондың ниндәй генә төрөн алма, хатта таҙартылғанында ла, сивуха майы барыбер бик юғары була. Мәҫәлән, яҡшы таҙартылған самогонда ағыулы матдәләр шарап спиртындағыға ҡарағанда 1,3 тапҡырға күберәк. Самогондың градусы юғары булған һайын, унда сивуха майы ла юғарыраҡ кимәлдә. Ошондай үлемесле ағыу һәр районда, һәр ауылда етештерелә, уға бер ниндәй ҡаршылыҡ-кәртәләр юҡ. Айыҡлыҡ өсөн көрәшеүсе ауылдаштары был "эшем эйәләрен" намыҫҡа саҡырып ҡарай-ҡараайын, тик тейешле закон нигеҙҙәре булмау сәбәпле, уларға ҡарата ҡәтғи саралар күреү мөмкинлеге юҡ. Ишетеүемсә, БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары ошо йәһәттән Енәйәт кодексына үҙгәрештәр индереү башланғысы менән бер-ике йыл самаһы элек Дәүләт Думаһына мөрәжәғәт тә итеп ҡараны, буғай, тик әлегә бер ниндәй үҙгәреш тә юҡ. Минә йыш ҡына "Эскелекте нисек бөтөрөргә?" тигән һорау бирәләр. Мин уларға:"Ике генә һүҙ ярҙамында: тәкдим итмәҫкә!" - тип яуап бирәм.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# БАЙМАҠ ҠЫҘҘАРЫ...

## спортта ла еңеүсе!

**Баймаҡ ҡалаһындағы 4-се лицейҙың "Шторм" ҡыҙҙар баскетбол командаһы "КЭС-Баскет" мәктәп баскетбол лигаһы ярышында Волга буйы федераль округы буйынса чемпион исемен яуланы!**




5-се биттә уҡығыҙ.

12+

✔ *Көмөшкәселәрҙең дә самогонды зәһәрерәк итеү өсөн был шыйыҡсаға теләһә ниндәй компоненттар ҡушыуы билдәле. Бына ҡайҙа ул кеше үлтереүселәр! Минеңсә, ул кешеләргә штраф һалырға түгел, ә төрмәгә ултыртырға кәрәк.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЗЫЯРАТ ҠЫЛЫҒЫҘ!

**Хәтмулла БУРАНБАЕВ, Ырымбур өлкәһе Каруанһарай мәсетенең имам-хатибы:** Каруанһарай комплексы һуғыштарҙа батырҙарса һәләк булған мәрхүм милләттәштәребеҙ рухына бағышлап төҙөлгән һәйкәл кеүек ҡабул ителә. Ысынлап та, ул башҡорт мосолмандары өсөн изге бер урынға әйләнгән. Сөнки ул бер үк ваҡытта ғибәҙәт урыны ла, иманды нығытыу сығанағы ла, ғилем алыу үҙәге лә булып тора. Мәсеттә башҡорт мосолмандары үҙ-ара аралашып, мөһим дин мәсьәләләрен ҡараған. Ошо изге ерҙән Рәсәй дәүләтен дошмандан һаҡлауға һуғышҡа оҙатҡандар, мосолман илдәренән килгән ҡунаҡтарҙы, делегацияларҙы ҡабул иткәндәр.

Каруанһарай үҙ тарихында бик күпте кисергән. Әммә уның мәсете совет осорона тиклем үҙ бурысын лайыҡлы үтәп килгән, тирә-яҡҡа аҙан тауышы яңғырап торған, унан кеше өҙөлмәгән, иң йәмле урындарҙың береһе булған. Бөгөн дә халҡыбыҙҙың күңелендә ошо изге урынға һөйөү хисе, үткәне менән рухи бәйләнеш йәшәй. Әгәр беҙ, дин әһелдәре һәм милли берләшмәләр вәкилдәре, ошо изге Каруанһарай мәсетенең эшен элekke кеүек йәнләндереп ебәрһәк, халҡыбыҙ алдында бер изгелек эшләр һәм Аллаһы ҡаршында бик сауаплы булыр инек.

Беренсенән, Каруанһарай мәсетен тейешле кимәлдә тәрбиәләп тотоу өсөн уға матди ярҙам күрһәтеү кәрәк. Ул кешене үҙенең матурлығы, таҙалығы, бөхтәлеге менән йәлеп итеп торорға тейеш. Икенсенән, мәсет тураһында сағыу һүрәтле бер китап сығарырға, халыҡҡа тарихи белешмә бирергә, мәсет һүрәтен Каруанһарайҙың визиткаһы итергә, ошо һүрәтте файҙаланып, календарҙар, открыткалар, сувенирҙар сығарырға кәрәк. Өсөнсөнән, Аллаһы Тәғәлә йортона - мәсеткә халыҡты алып килергә, дини саралар үткәрергә кәрәк. Шәриғәттә ул сара зыярат ҡылыу тип атала. Ләкин зыярат ҡылыуҙы изгеләр ҡәберенә барыу тип кенә ҡараусылар бар. Мәсеттәрҙе лә зыярат ҡылалар. Хатта ауырыуҙың да хәлен барып белеү ул зыярат ҡылыу тип атала. "Зыярат" тигән һүҙ - ул барып, күреп, хәл белеү тигәнде аңлата. Шуға ла бергәләп Каруанһарайҙы зыярат ҡылыуҙы ойоштороу зарур. Был ғәмәл халыҡтың рухи байлығын арттыра, рухиәтен күтәрә. Тимәк, ул башҡорт мосолмандарын берләштереүсе бер сара булыр ине. Сөнки халыҡ ниндәйҙер ғәмәлде бергәләп үтәһә, уларҙа ҡәрҙәшлек тойғоһо уяна. Зыярат ҡалған ваҡытта Каруанһарайҙың сағыу үткәнен хәтере аша ғына түгел, күңеле аша үткәреп, рухланып ҡайта, киләсәккә өмөт менән ҡарай башлай, ышанысы нығына, дәрте арта, патриотик һәм рухи тәрбиә ала.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Халыҡҡа төрлө шикле сифаттағы алкоголле эсемлектәр, дарыу төнәтмәләре һатыу менән күптән шөғөлләнә алыпһатарҙар - ошо мәсьәлә яңыраҡ ҡына БР Хөкүмәте ултырышында тикшерелде. Был күренеш һеҙгә танышмы?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА, журналист:*** Суррогат эсемлектәр, көмөшкә һатыусылар тураһында күп һөйләйбеҙ. Әле бына Ҡаҙағстан яғынан килтерелгән коньяк ишаратын эсеп, һәләк булған танышымды иҫкә төшөрҙөм. Юҡ, ул эскесе түгел, бик матур ғаилә башлығы, бәхетле атай ине. Дуҫ-иштәре менән балыҡ тоторға сығалар, күңел асыу өсөн кемдер алып килеп, сағыштырмаса арзан хаҡҡа һатҡан был зәһәрле эсемлекте лә һалып алалар. Йөрәге бик үк шәптән булмаған танышымдың башына йөҙ грамм коньяк етә. Хәйер, бындай фажиғәләр көн дә республика, ил буйынса булып тора. Ҡаҙағстандан йыл һайын миллионлаған һумлыҡ ошондай арзанлы шыйыҡса партиялап килтерелә һәм һатылып бөтә. Шуныһы аңлашылмай: нимә көтәбеҙ һуң? Был кемдәр өсөн отошло? Кеше ғүмерҙәре иҫәбенә аҡса эшләү ни өсөн Енәйәт кодексы тарафынан тейешле язаһын алмай?

Көмөшкәселәрҙең дә самогонды зәһәрерәк итеү өсөн был шыйыҡсаға теләһә ниндәй компоненттар ҡушыуы билдәле. Бындай эсемлектән кеше алйотлана, һуҡырая, мәңгелеккә ғәрип булып ҡала. Ә шул көмөшкәсене яуапҡа тарттырыуы үтә лә мәшәҡәтле эш. Закон шул үлемесле эсемлекте һатыусыларға ҡарата артыҡ миһырбанлы булып китә. Әгәр ҡәтғи, ҡаты закондар булһа, улар үлемесле шыйыҡса етештереүҙән айбыныр ине, бәлки. Беҙ ҡасандыр көмөшкәселәрҙең, медайныҡҡыҫа эләккәндәрҙең исем-шәрифтәрен үҙебеҙҙең "Һаҡмар" гәзитендә "Халыҡтан оялығыҙ!" рубрикаһында яҙып сығара торғайныҡ. Күптәр бындай фаш ителеүҙән бик ҡурҡа, ояла ине. Ә хәҙер уларҙы яҙырға ярамай, йәнәһе лә, кешенең хоҡуғын боҙоу була. Ә күрәләтә кешеләрҙе ағыулау нимә тип атала һуң? Шулай уҡ төрлө одеколон, техник спирт, спиртлы дарыу төнәтмәләрен күмәртәләп һатып алып, уларҙы кешеләргә ҡыйбатыраҡ хаҡҡа һатыусы алыпһатарҙар ҙа бар. Бына ҡайҙа ул кеше үлтереүселәр! Ни өсөн улар бер ниндәй ҙә яуаплылыҡҡа тарттырылмай? Минеңсә, ул кешеләргә штраф һалырға түгел, ә бер нисә йылға төрмәгә ултыртырға кәрәк. Сөнки улар-кеше үлтереүселәр.

Миңә бына нисәмә йылдар "Суд залынан" рубрикаһын алып барыу өсөн хөкөм залында булырға тура килә. Енәйәттәрҙең барыһы ла тиерлек шул хәмер йоғонтоһонда ҡылына. Иң ҡурҡыныс енәйәттәрҙең башында - теләһә ниндәй көмөшкә һ.б. эсеп ағыуланыусылар. Нисәмә йылдар бер үк хәбәрҙе һөйләйбеҙ, ә саралар күрелмәй. Шуға күрә был йүнәлештә бик ҡаты закон кәрәк. Һәм был енәйәтселәр штраф түләп кенә ҡотолорға тейеш түгел. Сөнки мин үҙем хоҡуҡ һаҡсылары менән рейдҡа сығып, көмөшкәселәр тотолған ваҡытҡа шаһит булғаным бар. Көмөшкәсе: "Ярай, штраф һалдығыҙ икән! Мин ул аҡсаны бер-ике көн эсендә кире ҡайтарам", - тип мыҫҡыллы йылмая ғына. Шуға күрә, теләһә ниндәй спиртлы эсемлектәр менән сауҙа итеүселәрҙе закон нигеҙендә көрәшеп кенә еңергә була.

***Фәтих МУЛЛАҒОЛОВ, хеҙмәт ветераны:*** Был күренеш беҙҙең бөтәбеҙгә лә бик яҡшы таныш ҡына түгел, һөҙөмтәләре күҙ алдында сәсрәп ята. Баш ҡалабыҙҙың мәҙәни һәм ял паркы янында йәшәгәс, ял көндәрендә ейәнсәремде шунда алып сығам: аллея буйлап йәйәү йөрөйбөҙ. Шундағы юл буйҙары, үлән, ағаслыҡ аралары әлеге төнәтмә шешәләре менән тулы. Һыра шешәләрен, ярай ҙа, артынса уҡ йыйып йөрөүсе "санитарҙары" бар, ә был бәләкәй шешәләрҙең бер кемгә лә кәрәге юҡ - эсендәге "дарыуын" бер тынала һемерә лә, ташлап та китәләр. Әйткәндәй, кәрәге тейеп, хәҙер аптекаға инһәң, әлеге "Боярышник" төнәтмәһен һорауы ла уңайһыҙ була башланы бит. Ҡатыныма терапевт юғары ҡан баҫымын төшөрөү өсөн "Корвалол", "Һуҡыр кесерткән", "Боярышник" төнәтмәләрен бергә ҡушып, 1-әр сәй ҡалағы эсергә ҡушҡан. Шуларҙы алырға тип бер көн аптекаға инһәм, минең алдан ғына бит-күҙе шешенеп бөткән бер ир йәмшәйеп, ҡарайып бөткән ваҡваҡ тинлек аҡсаларына ике-өс шешә ошо үлән төнәтмәләрен алып, кеҫәһенә тыңҡыслап тора. Бындай шешәләрҙе, йәғни ҡыҙыл борос, боярышник төнәтмәләрен, һәр төрлө лосьон һәм арзан одеколондарҙы хәҙер хатта "Өфө-матбуғат" киоскыларында ла, ҡайһы бер промтауар магазиндарында ла йыш күрергә тура килгеләй. Тимәк, был сауҙа нөктәләре, бер кемдең дә тикшермәүенән файҙаланып, асыҡтан-асыҡ эскеселәрҙе хеҙмәтләндереүгә күскән!

Законһыҙ әйләнештәге спиртлы эсемлектәрҙе тыйыу буйынса булып үткән БР Хөкүмәте ултырышында яңғыраған ҡайһы бер һандарҙан сәстәр үрә торорлоҡ бит: РФ Иҫәп палатаһы мәғлүмәттәре буйынса, илдә йылына 1 млрд. литр самаһы иҫәпкә алынмаған спитрлы эсемлек аҫтыртын рәүештә һатыла, шуның 150-170 млн литры - әлеге аптека төнәтмәләре. Һәм бындай суррогаттарҙың бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ хатта һаулыҡ һаҡлау учреждениеларына үтеп инеүе ҡот осорлоҡ күренеш. Бар, шунан һатып ал инде аптеканан дарыу!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*ИҒТИБАР!*

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**31 мартҡа тиклем быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Ташламалы хаҡ 513 һум 72 тин тәшкил итә. Апрелдә хаҡтарҙың артыу ихтималлығын күҙҙә тотоп, гәзитебеҙгә әле үк яҙылып ҡуйырға кәңәш итәбеҙ.**

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 402 һумға яҙылырға була.
- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 252 һум.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 252 һум.
- **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Мартта гәзитебеҙгә яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер Рәшит Назаровтың **"Ер һәм йыһан йыры"** йыйынтығын, Шәүрә Шәкүрованың **"Өфө вокзалы"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, **"Антология поэзии Башкортостана"**, Ә. Әсфәндийәровтың **"История сел и деревень Башкортостана"**, башҡортса **"Дини календарь"**, Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?
- Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog. kiskeufa.ru.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов сираттағы Хөкүмәт ултырышында 2019 йылға тиклем эшләйәсәк Хөкүмәт эшмәкәрлеге программаһы менән таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, киләсәктә лә өҫтөнлөклө йүнәлеш булып инвестицион мөхит булдырыу, сәнәғәтте, ауыл һәм урман хужалығын, ҡулланыусылар баҙарын үҫтереү, эшҡыуарлыҡ һәм туризмға ярҙам итеү торасаҡ. Программаның икенсе өлөшө инфраструктура һәм территория үҫешенә арналған.

✔ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында Башҡортостан Башлығы былтырғы йылға йомғаҡ яһаны. Былтырғы йыл иҡтисади яҡтан ауыр тамамланһа ла, республика иҡтисады тотороҡло ҡала. Бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын күтәреү өсөн өҫтәмә рәүештә 2,5 млрд һум аҡса йүнәлтелгән. Тулайым төбәк продукты 1,5 процентҡа күтәрелгән һәм был күрһәткес буйынса республика төбәктәр араһында илдә икенсе урынға сыҡҡан. Республика Хөкүмәтенең уңышлы эшмәкәрлеге федераль рейтингтарҙа ла сағыла.

✔ 1 апрелдән илдә яҙғы саҡырылыш кампанияһы башлана. Ул 15 июлгә тиклем дауам итәсәк. Рөстәм Хәмитов үҙенең ҡарары менән Башҡортостан, муниципаль район һәм ҡала округтары саҡырылыш комиссияларының төп һәм резерв составын, шулай уҡ яҙғы саҡырылыш мәлендә йәш егеттәр тикшереү үтәсәк дәүләт һәм муниципаль медицина учреждениелары исемлеген раҫланы. Ҡарарға ярашлы, Башҡортостандың төп саҡырылыш комиссияһы рәйесе булып Республика Башлығы, ә резерв комиссияһы рәйесе булып беренсе вице-премьер Рөстәм Мәрҙәнов тора. Ҡала һәм райондарҙа был вазифалар урындағы хакимиәт башлыҡтарына йөкмәтелә.

✔ Башҡортостанда Формаль булмаған хеҙмәт мөнәсәбәттәрен түбәнәйтеү һәм эш хаҡын ваҡытында түләү буйынса ведомство-ара комиссия эшләй башланы, уны республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов етәкләй. Рәсәй Хеҙмәт министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, илдә хеҙмәткә яраҡлы 88,5 млн кеше иҫәпләнә, ә 49 млн кеше генә хеҙмәт урынында законға ярашлы теркәлгән. Комиссия даими эшләүсе орган буласаҡ.

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ТЕЛ БУЛМАҺА, ИЛЕҢ ДӘ ЮҠ!



Х. С. Фазылов картинаһынан.

**Мин - хаҡлы ялдағы уҡытыусы. Әммә ғүмерем буйына туған тел уҡытыусыһы булып эшләгәнлектәнме, һаман да мәғарифта барған үҙгәрештәргә битараф ҡала алмайым, дөрөҫөрәге, туған телебеҙҙе уҡытыуҙа осрап торған ҡаршылыҡтарҙы йөрәк ҡабул итмәй. Туған телгә ҡараш, уны һаҡлауға, үҫтереүгә индергән өлөш тә ысын башҡорт булыуыңды раҫлаусы бер күрһәткес түгелме һуң?**

Былтыр йыл аҙағында Өфөлә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының киңәйтелгән ултырышында ҡатнашырға тура килде. Туған тел һәм уны уҡытыуға арналған ултырышта залдағы шау-шыу, кемдәрҙеңдер туҡтауһыҙ үҙ-ара һөйләшеүе минең өсөн шаҡҡатырғыс хәл тойолдо. Докладсының республика буйынса башҡорт мәктәптәренең күпләп ябыла барыуы ғына түгел, саф башҡорт мәктәптәрендә фәндәрҙең урыҫ телендә алып барылыуы тураһындағы сығышына күптәр битараф ҡалды шикелле. Ысын башҡорттар бармы һуң бында, тип аптырап ҡалдым. Регламенттың тар булыуы сәбәпле, һорауҙарҙың күбеһе бирелмәй ҡалды, бирелгәндәренә лә нигеҙле яуаптар алынманы.

Шулай уҡ дәреслектәр тураһындағы минең сығышыма ризаһыҙлыҡ белдереүселәр булды. Ғәҙәтем буйынса, дәлилләрлек миҫал булмағанда, өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрәм. Әммә урыҫ кластары өсөн төҙөлгән башҡорт теле дәреслектәрендә сит телде өйрәтеү методикаһына нигеҙләнгән бер генә тема ла юҡ, тигәнде раҫлай алам. Быңдай дәреслектәр буйынса үткәрелгән дәрестән һуң, әлбиттә, уҡыусыла башҡорт теленә ҡарата нәфрәт тыуа, был нәфрәт уларҙың ата-әсәләренә лә күсә. Тимәк, һөҙөмтә - нуль: белем дә юҡ, ихтирам да юҡ, тик интернетта телебеҙгә ҡаршы ҡотҡо һүҙҙәр генә бар.

Хәҙер гәзит уҡыусыларға һорау: был ҡарашты кем тыуҙырҙы? Башҡорттар үҙҙәре түгелме? Шулай икән, ниңә хаталарыңды төҙәтмәҫкә, ғәйепте ниңә башҡорт теле уҡытыусыларына өйөп, ҡойроҡто һыртҡа һалырға? Башҡа милләт халыҡтарының телебеҙҙе өйрәтеүгә ҡарата булған ҡарашын үҙгәртергә мөмкинме? Әлбиттә, мөмкин! Минеңсә, быңдай маҡсатҡа өлгәшеү өсөн дәреслек төҙөүсе ғалимдарыбыҙ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына, уҡыусыларға, ата-әсәләргә ҡарата иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға бурыслы. Һәр хәлдә, "Минең дәреслегем - милләтебеҙҙең йөҙө" принцибынан сығып төҙөлгән дәреслеккә ҡаршы сығыусылар булмаҫ.

Байтаҡ йылдар элек Сибай мәктәптәре уҡыусылары менән осрашыуҙа Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил ағай Бикбаев залға йыйылыусыларға һорау бирҙе: "Был донъяла иң ҡәҙерле нәмә нимә?" Иң беренсе яуап "Башҡортостан" һүҙе булды. Халыҡ шағиры өндәшмәне. Артабан төрлө яуаптар китте: тыуған ер, Урал, Ватан, Тыуған ил, атай-әсәй... Яуаптарҙың береһе лә Рауил ағайҙы ҡәнәғәтләндермәне. Был хәлдән барыбыҙ ҙа баҙап ҡалдыҡ. Баҡтиһәң, ошоға тиклем уҡытыусылар ҙа, дәреслек төҙөүсе ғалимдарыбыҙ ҙа телебеҙҙе "Башҡортостан" һүҙенә бәйләп кенә үҫтереү яғында булғанбыҙ, имеш, ә киреһенсә түгел. "Тел, - тине халыҡ шағиры. - Тел булмаһа, Башҡортостаныбыҙ ҙа, Ватаныбыҙ ҙа, башҡорт телендә һөйләшкән атай-әсәйҙәребеҙ ҙә булмаҫ. Беҙгә телде һаҡларға кәрәк", - тип, "тел" һүҙенә баҫым яһап дауам итте ул сығышын. Үҙен ысын башҡорт тип һанаған кешене хафаландырмай ҡалмаған был осрашыу күптәребеҙҙе уҡытыуға өр-яңы күҙлектән ҡарарға мәжбүр итте. Күптәр ошо осрашыуҙан фәһем алып, әсә теленә өйрәтеүҙең концепцияһы бөтөнләй дөрөҫ булмауына ишаралай башланы. Шулай уҡ методиканы терминдар ятлатыуға ҡайтарып ҡалдырмай, һүҙ байлығын арттырыу, фекер төҙөклөгөн үҫтереү өҫтөндә системалы эшләүгә йүнәлтерлек дәреслектәр төҙөү Мәғариф министрлығының бурысы икәнлеге аңланы. Үҙемә ҡалһа, юғары кластарҙа башҡорт кластарын урыҫ кластарына ҡушыу мәсьәләһен туған телебеҙ файҙаһына хәл итеү мотлаҡ тип иҫәпләйем. Әммә был фекеремдең тормошҡа ашырына шикләнәм, шикләнеүемдең сәбәбе етди - ысын башҡорттоң ғына хәленән килер быңдай эш.

Кеше булғанын һаҡлай белергә, ә хәүеф янағанда, уны яҡлай белергә тейеш. Беҙҙең башҡорт теле бөгөнгө көндә яҡлауға мохтаж: башҡорт ауылдары бөтөрөлә, мәктәптәр ябыла, башҡорт кластары урыҫ кластары менән берләштерелә, фәндәр тик урыҫ телендә уҡытыла, башҡорт теле дәрестәре һаны йылдан-йыл кәмей. Шуныһы аяныслы: быларҙың барыһы ла аңлы рәүештә эшләнә, ә беҙ, башҡорттар, теге хужаны йәиһә был хужаны башҡорттан ҡуйырға кәрәк ине, тип гәп һатабыҙ. Уҡытыусыға ижади эшләрлек шарттар тыуҙырылмаһа, Хөкүмәт альтернатив дәреслектәр төҙөүгә аҡса йәлләһә, Мәғариф министрлығы үҙ эшен башҡорт теле уҡытыусыларын тикшереүҙә генә күреп, реаль ярҙам күрһәтмәйенсә, отчёт биреү менән генә мауыҡһа, Яҙыусылар союзы һәүетемсә шым йәшәһә, телевидение, башҡа матбуғат баҫмалары үҙ өлөшөн индермәһә, үкенескә ҡаршы, башҡорт теле уҡытыусылары үҙҙәре генә бер ни ҙә эшләй алмаясаҡ. Һуңғы йылдарҙа ҙур шау-шыулы саралар үткәреп, эш һөҙөмтәләрен "күрһәтеү" модаға кереп китте. Әммә башҡорт теле уҡытыусыларының эш һөҙөмтәләре йылдар үткәс, хатта уҡытыусы пенсияға сығып киткәс кенә күренә. Күрәһең, башҡорт булып тыуған һәр кеше башҡортса һөйләшеп йәшәй ала, әммә милләтен яҡларлыҡ ысын башҡорт булып китә алмай.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# АҘАШҠАНДАРҒА ЮЛ КҮРҺӘТӘ...

## шикләнгәндәргә ышаныс бирә

**Теге йәки был баҫманың уҡыусылар тарафынан ҙур һорау менән файҙаланыуын гәзиттең йәки журналдың тиражы ғына һынландырмай, тип уйлайым. Миңә ҡалһа, ҡайһы бер баҫмаларҙы алдырыусыларҙың рәсми һанына тағы ла меңәрләгән дана өҫтәргә мөмкин. "Киске Өфө" гәзите нәҡ ошондай баҫмаларҙың береһе булыуына шикләнмәйем.**

Мәҫәлән, йортобоҙға килгән "Киске Өфө"нө беҙҙән тыш күршеләр, туғандар, дуҫтар, ғөмүмән, ярты ауыл уҡып сыға. Үҙенең характеры, йөҙө булған сағыу, мәғлүмәтле, бай йөкмәткеле гәзитте уҡымай булмай шул - аҙна аҙағын күмәкләп көтөп алабыҙ. Гәзиттәге һәр рубрика төптән уйланылған булыуы менән күңелгә яҡын. Мәҡәләләр фекер тәрәнлеге, төрлө өлкәне үҙ эсенә алыуы, сифатлы булыуы, заман талабына тура килеүе һәм актуаллеге менән айырылып тора. Һәр һан үҙенсәлекле һәм был ҡыуандырмай ҡалмай. Гәзиттә айырыуса ғаиләләр менән ойошторолған әңгәмәләр, эшҡыуарҙар, сәнғәт кешеләре һәм башҡа өлкәлә хеҙмәт итеүсе шәхестәр менән монологтар күңелгә яҡын. Улар араһында таныштар ҙа осрай һәм ошондай мәҡәләләр уларҙың әлегәсә белмәгән яңы сифаттарын асыуы, төрлө темаға ҡағылышлы фекерҙәрен еткереүе менән әһәмиәтле. Республиканың төрлө ауылдарында күпләп бала тәрбиәләүсе, эшһөйәр, изгелекле ғаиләләр бихисап. Шундай бәхетле йорттар тураһында күберәк мәғлүмәт күрергә теләк бар.

Күптән түгел донъя күрә башлаған "Килешмәйем" һәм "Тураһын әйткәндә" рубрикаларын билдәләп үтергә кәрәк. Тормош ағышы шул тиклем тиҙ, эргә-тирәләге ҡайһы бер күренештәр, ваҡиғалар күҙгә эленмәй ҙә ҡала. Ошо рубрикалар аҫтында донъя күргән мәҡәләләр уларға иғтибарҙы йүнәлтергә, йәмғиәттең тын алышына төшөнөргә ярҙам итә. Һәр кемдең күңелендә нимә менән булһа ла килешмәүсәнлек тойғоһо ята, ләкин, күпселек осраҡта, уны йәмәғәтселеккә еткererлек мөмкинлек юҡ. "Киске Өфө" ошо йәһәттән уникаль мөмкинлек бирә - әйтер һүҙең булһа, әйтеп ҡал, күңелеңде өйкәгән мәсьәләне барыһына ла еткер - бөтә Башҡортостан ишетер.

Үҙенең уҡыусыларына, милләттәштәребеҙгә, телебеҙгә, республикабыҙға һөйөү һәм ихтирам - "Киске Өфө"нөң төп нигеҙе. Изге хеҙмәтегеҙ, ғәҙел һүҙегеҙ, яҡшылыҡҡа, яҡтылыҡҡа өндәүегеҙ, аҙашҡандарға юл күрһәтеүегеҙ, шикләнгәндәргә ышаныс биреүегеҙ өсөн рәхмәт белдергем килә.

**Сәлих ИШМЫРҘИН.**
**Күгәрсен районы Мораҡ ауылы**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Ирәмәл" тәбиғи паркы Рус географик йәмғиәте ойошторған конкурста экологик-мәҙәни маршрут булдырыу өсөн грант отто. Был саралар "Урал батыр" эпосы мотивтары буйынса марштур ойоштороуға тотоноласаҡ. Иҫәпләүҙәр буйынса, яңы экскурсия маршруты туристарҙы күпләп ылыҡтырасаҡ, был иһә яңы эш урындары булдырыуға ла этәргес буласаҡ. Проектты тормошҡа ашырыу сиктәрендә парк территорияһында төрлө һындар, барельефтар, декоратив паннолар ҡуйыласаҡ, был эштәр йыл дауамында эшләнеп бөтәсәк.

✓Апрелдең тәүге ун көнөндә яуым-төшөм күберәк көтөлә. Был көндәрҙә һауа температураһы минус 10-1, көндөҙ 5-10 градус йылы буласаҡ. Айҙың икенсе яртыһында ҡар яуыуы, бер аҙ һыуытыуы ихтимал. Апрель аҙағында көндәр йылынасаҡ, һауа температураһы норманан бер градусҡа юғарыраҡ буласаҡ, яуым-төшөм дә норманан артмаясаҡ. 2-4 апрелдән көндәр яйлап йылыныуға китәсәк. Йылғаларҙа боҙҙоң да быйыл 1-2 көнгә иртәрәк китеүе көтөлә.

✓Әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге Һ. Дәүләтшина исемендәге республика дәүләт премияһы яҙыусы һәм тәржемәсе Әсхәл Әхмәт-Хужаға бирелде. Был премияға ул "Ямғыр тамсыһы" китабы өсөн лайыҡ булды. Башҡортостан Республикаһының Һ. Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы 2005 йылда булдырылды. Премия лауреаттары араһында Гөлфиә Юнысова, Факил Мырҙаҡаев, Кәтибә Кинйәбулатова, Сафуан Әлибаев бар.

✓Өфөлә билдәле дәүләт эшмәкәре Зыя Нуриевҡа таҡтаташ асылды. Ул БР Хөкүмәт Йорто эргәһендә урынлашҡан. Яңыраҡ Өфө ҡала Советы ҡарары менән был скверға Зыя Нуриев исеме бирелгәйне. Тантанала республика, ҡала етәкселеге вәкилдәре, легендар дәүләт эшмәкәренең туғандары, ҡала халҡы ҡатнашты.

✓Еңеүҙең 70 йыллығы уңайынан 3 - 12 майҙа бөтөн ветерандар йәмәғәт транспортында бушлай йөрөй аласаҡ. Был бөтөн төр транспортҡа ла ҡағыла. Бушлай сәйәхәт итеү өсөн ветеранға паспорт һәм һуғышта ҡатнашыуы йәки һуғыш инвалиды булыуы тураһында раҫлаған документ ҡына кәрәк.

**“Башинформ”дан.**

✓ *"Ошондай инҡар иткеһеҙ дәлилдәр бар саҡта, тарих хаҡында уйҙырмалар ҙа ҡалмаҫ, боронғо Өфөнөң башҡорттар менән бәйлелеге йәһәтенән шиктәр ҙә булмаҫ ине", - ти Алиса тәьҫораттары менән уртаҡлашып.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҺӘР ЙҮНӘЛЕШТӘ ЛӘ - ҮҪЕШ

**Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында 15-ләп яңы урамға исем биреү мәсьәләһе ҡаралды, Өфөнөң Октябрь районында ике территориаль йәмәғәт үҙидаралығы сиктәре билдәләнде, ҡаланың демографик хәленә анализ яһалды.**

"2014 йыл - унан алдараҡ осорҙағы ыңғай тенденцияларҙы һаҡлау һәм уларҙың артабанғы үҫеше өсөн яңы мөмкинлектәр тыуҙырыу йылы булды", тип билдәләне Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов үҙенең сығышында һәм үҫеш күрһәткесен ҡайһы бер һандар аша ла раҫлап үтте. Мәҫәлән, һуңғы биш йылда баш ҡалала етештерелгән сәнәғәт продукцияһының күләме 225 миллиард һумға артҡан. Шулай уҡ инвестициялар өлкәһендә лә яҡшы күрһәткестәр күҙәтелә, былтыр уларҙың күләме 105 миллиард һумға еткән. Бөгөн Өфөлә 170 миллард һумлыҡ 176 проект эшләнеү өҫтөндә. Әгәр ҙә улар тормошҡа ашырылһа, тағы ла 17 мең яңы эш урыны асыласаҡ. Ҡала бюджетына былтыр 22,5 миллиард һум табыш ингән, 2013 йылға ҡарата был күрһәткес 4 процентҡа юғарыраҡ. Ҡала бюджетының 80 проценты социаль өлкәгә йүнәлтелгән. Былтыр 822 мең квадрат метр торлаҡ төҙөп тапшырылған. Ирек Ишмөхәмәт улы билдәләүенсә, торлаҡ күберәк төҙөлһә лә, төрлө етешһеҙлектәр булғанға күрә, ҡала хакимиәте төҙөлгән йорттарҙың бер өлөшөн ҡабул итмәгән. Муниципалитеттың төп принцибы - квадрат метрҙар артынан ҡыуыу түгел, ә торлаҡтың сифаты юғары булыуын талап итеү.

Депутаттар был ултырышта 15 яңы урамға исем бирҙе. Был урамдар башлыса баш ҡаланың Дим биҫтәһендә, тағы ла ике урам Киров районының Искино һәм Атаевка ауылдарында урынлашҡан. Урамдар араһында Хыялыйҙар, Ғашиҡтар, Машинистар, Бәләкәй Атлант тип аталғандары ла бар. Шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте йорто менән Салауат Юлаев урамдары араһындағы скверға Советтар Союзы кимәлендә билдәле дәүләт эшмәкәре Зыя Нуриевтың исемен биреү раҫланды.

Демография мәсьәләләренә ҡағылып, 2015 йылдың 1 ғинуарына Өфөлә 1 миллион 116 мең кеше йәшәй, тип билдәләнде. Миллионлы ҡалалар араһында Өфө 11-се урында тора. Һуңғы ете йылда баш ҡалала халыҡтың тәбиғи үҫеше күҙәтелә. Шулай ҙа тыуым һаман булһа ла төп демографик мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала. Тыуымдың артыуына йоғонто яһаған факторҙарҙың береһе - ғаилә мөхите. Ғаилә ҡороуҙы һуңлатыу бөгөнгө көн тенденцияларының береһе. Беренсе законлы никахҡа инеүсе ир-егеттәрҙең уртаса йәше - 27, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы 25 йәш тәшкил итә, шуға күрә бала табыу ҙа кисектерелә. Рәсәйгә хас булғанса, енестәр араһында көсһөҙ заттар һаны күберәк - 1000 ир-егеткә 1212 ҡатын-ҡыҙ тура килә (Башҡортостанда 1000 ир-егеткә 1134 ҡатын-ҡыҙ иҫәпләнә).

**Шулай итеп, иҡтисади көрсөк шарттарында ла баш ҡала үҫеүен дауам итә, тип билдәләнде кәңәшмәлә. Проблемалар юҡ түгел, ләкин уларҙы хәл итеү буйынса саралар күрелә. Ғөмүмән, Өфө һуңғы йылдарҙа Рәсәй, халыҡ-ара кимәлдәге саралар майҙансығына әүерелде, әлеге ваҡытта ШОС һәм БРИКС илдәре саммитына әүҙем әҙерлек бара.**

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

**Баш ҡаланың "Урал" галереяһында "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығы тарафынан әҙерләнгән "Урта быуаттарҙағы хәрби мәҙәниәт" һәм "Боҙ осоро паркы" тип аталған ике экспозиция ойошторолдо.**

# БОРОНҒО ҠАЛАНЫ...

## күргәҙмәлә күрергә була



Өфө-II ҡаласығы территорияһында барған ҡаҙыныу эштәре ваҡытында миллиондан ашыу артефакт табылған. Был юлы ошо табылған артефакттарға нигеҙләнгән күргәҙмә хәрби темаға арналды. Урта быуаттарға хас булғанса, Өфө территорияһында ла фартификацион нығытмалары булған ҡалға урынлашҡан булған. Ләкин ул таш диуарҙар менән түгел, ағас ҡоймалар, ер өйөмдәре менән нығытылған. Ошоно раҫлаған дәлилдәрҙе шул осорға ҡараған карталарҙа табырға була. Күргәҙмәгә килеүселәргә уҡ-һаҙаҡ, тимер бысаҡтар, тиренән тегелгән боронғо хәрби кейемдәр күрһәтелде. Шулай уҡ ошо теманы яҡтыртҡан башҡа экспонаттар ҙа булды. Тарихи реконструкторҙар табылған артефакттар нигеҙендә боронғо яугир кейемдәре һәм ҡоралдары күрһәтелгән макет эшләгән, хатта уға шартлы рәүештә Ильяс тип исем дә биргән. Икенсе залда Көньяҡ Уралда ҡасандыр йәшәп, һуңынан юҡҡа сыҡҡан мамонт, йөнлө мөгөҙморон, мәмерйә арыҫландарының һәм айыуҙарының һөйәктәре ярҙамында күрһәтелгән төбәктең боронғо фаунаһы менән таныштыҡ.

Директоры Гәүһәр Батталова әйтеүенсә, музей-ҡурсаулыҡ киләсәктә баш ҡаланың матур, сағыу урындарының береһенә әйләнәсәк. Унда килеүселәр Урта быуаттар мөхитенә инеп, уның һауаһын һулап, ҡаланың боронғо тарихы менән таныша аласаҡ.

- Беҙҙең музей республикала иң йәше. Уға бары дүрт кенә йыл. Тәүге күргәҙмәбеҙ былтыр Президент гранты иҫәбенә ойошторолдо һәм "Боронғо ҡаланың серҙәре" тип аталғайны. Был икенсе күргәҙмәбеҙ. Өсөнсө күргәҙмәне ошо йылдың октябрендә, Республика көнөнә ойошторорға уйлайбыҙ һәм ул башҡорттарҙың боронғо биҙәүестәренә арналасаҡ, - тине ул.

Тамашасыларға ла күргәҙмә оҡшаны. Ҡаланың юғары уҡыу йорто студенты Алиса Ниғмәтйәноваға, мәҫәлән, бындай саралар халыҡ тарихына бәйле белемдәрен киңәйтергә ярҙам итә. "Музей-ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәре тырышлығы менән ойошторолған был күргәҙмәлә быға тиклем фән менән яҡындан шөғөлләнгән айырым кешеләргә генә билдәле ҡиммәтле тарихи ҡомартҡылар күрһәтелә. Бының әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ, ошо рәүешле беҙ тарихыбыҙҙы башҡаларға ғына түгел, хатта үҙебеҙҙең милләттәштәргә лә күрһәтеп, аңлата алабыҙ. Ошондай инҡар иткеһеҙ дәлилдәр бар саҡта, тарих хаҡында уйҙырмалар ҙа ҡалмаҫ, боронғо Өфөнөң башҡорттар менән бәйлелеге йәһәтенән шиктәр ҙә булмаҫ ине", - ти Алиса тәьҫораттары менән уртаҡлашып.

Әйткәндәй, ошо йылдың ғинуар айында буласаҡ музей-ҡурсаулыҡ тарафынан "Боронғо Өфө" комплексы проектына инәсәк архитектура ҡоролмаларына конкурс иғлан ителгәйне. Унда әлеге ваҡытта 60-тан ашыу эш ҡабул ителгән дә инде. Июнь башында конкурстың еңеүсеһе билдәле буласаҡ. Тап еңеүсе тип табылған проект буйынса музей ҡоролмаһы төҙөләсәк.

**Азамат АБУТАЛИПОВ.**

*ҺАҠ БУЛ!*

# ТАШҠЫНҒА ЛА ӘҘЕРЛЕК КӘРӘК



**Өфө ҡалаһы, йылдағыса, яҙғы ташҡынды ҡаршыларға әҙерләнә. Ҡала һәм райондарҙың ташҡынға ҡаршы комиссиялары ултырыштарында билдәләнгән бурыстар буйынса эш башланды ла инде.**

Әҙерлек эштәре барышында ташҡындың һәр мөмкин булған сценарийы күҙ уңында тотола. Мәҫәлән, йөрөй торған юлдарҙы һыу баҫа ҡалһа, янғын һүндереүсе насос станциялары, таҙалау һәм ләм һурҙырғыс машиналар ирегән ҡар һыуын тиҙ арала һурҙырып сығарыу өсөн тулы әҙерлек хәлендә буласаҡ. Автомобиль юлдары һыу аҫтында ҡалған урында йәшәүселәрҙе ташыу бурысы "Йылға аша сығарыу хеҙмәте" муниципаль бюджет учреждениеһына йөкмәтелгән. Ойошма был йәһәттән ике судно бүлгән һәм улар төпкөл урындарға ла ҡаршылыҡһыҙ үтә алһын өсөн йылға үҙәнен таҙартыу, тәрәнәйтеү эштәре башҡарылған. Шулай уҡ Өфө ҡалаһының "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" эҙләү-ҡотҡарыусылар отряды, йылдағыса, кәрәк осраҡта кешеләрҙе кәмә һәм катерҙарҙа күсерешәсәк. Был ойошманың 2026 хеҙмәткәре һәм 433 техника берәмеге ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә ҡала халҡына ярҙамға килергә әҙер.

Бынан тыш, автомобиль юлдарын һәм йорт территорияларын һыу баҫыуҙан һаҡлау ниәтендә муниципалитет көсө менән даими рәүештә ҡар ситкә йыйып сығарыла. Мәҫәлән, Ленин районын төҙөкләндереү хеҙмәте тарафынан 16 февралдән 17 мартҡа тиклемге арауыҡ эсендә Ни-

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ШОС һәм БРИКС саммиттары ваҡытында Өфөлә 214 күҙәтеү камераһы эшләйәсәк. Уларҙы урынлаштырыу 1 июнгә тиклем тамамланасаҡ. Ҡала хакимиәте мәғлүмәттәре буйынса, әле 118 видеокамера ҡуйылған да инде, ҡалғандары төҙөлөп ятҡан яңы объекттар ҡулланыуға тапшырылғас ҡуйыласаҡ.

✓Өфө ҡалаһын үҫтереү йәмәғәт фонды IX "Баш ҡала ҡаҙанышы" Ҡала йәмәғәт премияһына дәғүәселәр ҡабул итә. Ғаризалар 6 апрелдән 13 апрелгә тиклем фондтың офисында ҡабул ителә. Ойоштороусылар ҡаланың бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн битараф булмаған өфөләрҙе бәйгелә ҡатнашырға саҡыра. Һигеҙ йыл эсендә был премия 422 кешегә тапшырылған, улар араһында вуз уҡытыусылары, сәнғәт эшмәкәрҙәре, спортсылар, студенттар, табиптар, балалар баҡсалары етәкселәре, уҡытыусылар, эшҡыуарҙар бар.

✓Өфөлә бер ай эсендә юлдарҙағы соҡорҙарҙы ремонтлау өсөн 2,1 мең тонна асфальт һалынған. Ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, әлеге мәлдә 11,7 мең квадрат майҙанда эштәр тамамланған. Ҡала хакимиәте өфөләрҙе "Өфө соҡорҙарға ҡаршы" акцияһында ҡатнашырға саҡыра. Был ҡала урамдарындағы юлдарҙың торошон билдәләргә һәм кәрәк булғанда ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уларҙы төҙөкләндереүгә булышлыҡ итәсәк.

✓28 һәм 29 мартта Өфө ҡалаһында ауыл хужалығы йәрминкәләре үтәсәк. 28 мартта Дим (Хәҡиҡәт урамы, 21), Калинин (Интернациональ урамы, 139), Киров (Эшсе хәбәрселәр урамы, 5-7), Ленин ("Народный" павильоны ҡаршыһында), Орджоникидзе ("Тополя" сауҙа йорто эргәһен-дә), 28-29 мартта Октябрь (Зорге урамы, 44), Орджоникидзе ("Меркурий" сауҙа үҙәге, "Урал" сауҙа-күңел асыу комплексы эргәһендә) райондарында ойоштороla.

✓Мәсетле районы ҡумыҙсыларҙы һәм өҙләүселәрҙе бәйгегә саҡыра. БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Мәсетле районы үткәргән был сара 9-10 апрелдә Оло Ыҡтамаҡта үтәсәк. Бәйгелә ҡатнашыу өсөн ғаризаны gukrcnt@mail.ru адресына ебәрергә йәки 8 (347) 289-65-50, 289-66-96 телефонына шылтыратып әйтергә. Ғаризалар 2015 йылдың 1 апреленә тиклем ҡабул ителә.

*АФАРИН!*

# БАЙМАҠ ҠЫҘҘАРЫ...

## спортта ла еңеүсе!



(Башы 1-се биттә).

Баймаҡ ҡыҙҙарының оло еңеүе республикала ғына түгел, ә Волга федераль округы төбәктәре өсөн дә көтөлмәгән асыш булды. Беҙҙең "Шторм" командаһы илгә яҡшы билдәле булған Ҡаҙан, Пенза, Һарытау, Новокуйбышевск, Һамар, Мордовия командаларын бер-бер артлы тар-мар итә башлағас, уларҙың тренерҙары картанан Баймаҡ ҡалаһының ҡайҙа урынлашыуын эҙләргә тотона. Бәләкәй генә ҡаланан килгән ҡыҙҙарҙың шундай юғары кимәлдә уйнай алыуҙарына ышанып та етмәйҙәр. "Шторм" командаһының тренеры Р. Мукаев әйтеүенсә, ул был еңеүгә 15 йыл әҙерләнә. "Бәлки, мин ниндәйҙер кимәлдә ҡыҙҙарҙың бала сағының бер өлөшөн урлайымдыр. Сөнки улар аҙнаһына бер нисә мәртәбә түгел, ә йыл әйләнәһенә бер туҡтамай, алһыҙ-ялһыҙ шөғөлләнә. Йәйгеһен башҡа балалар ял иткәндә лә, улар күнекмәләр менән мәшғүл була", - тине ул.

Эйе, юғары кимәлдә танылыу яулау өсөн фәҡәт ана шундай көсәргәнешле күнекмәләр аша үтергә кәрәктер. Һөҙөмтәлә, әсе тир түгеп әҙерләнеүҙең емеше бигерәк татлы булды бит! "Шторм" командаһының Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы финал уйынына район етәксеһе И.Х. Ситдиҡов, уның урынбаҫары Р.Ф. Иҫәнбаев, мәғариф бүлеге начальнигы И.Ә. Зәйнуллин, йәштәр, спорт бүлектәре, район журналистары, Баймаҡ телевидениеһы хеҙмәткәрҙәре һәм ҡыҙҙарға уйын барышында рухи таяныс бирергә ашыҡҡан бер автобус үҫмерҙәр, йәштәр барҙы. Тәүҙә тотош Башҡортостан Республикаһының намыҫын ниндәйҙер бәләкәс кенә ҡаланың командаһы яҡлауына аптыраған кешеләр, һуңынан Баймаҡ ҡыҙҙарының оҫта уйнауына хайран ҡалып, "Баймаҡ-Баймаҡ!" тип алҡышлай башланы. Уйынды интернет селтәре аша ҡараған баймаҡтар ҙа "Шторм" командаһы өсөн белгән бар доғаларын уҡып сыҡҡандыр. Шулай итеп, "Шторм" - еңеүсе! Юғары кимәлдә ойошторолған ярышта мәртәбәле ҡунаҡтар, билдәле спортсылар ҡатнашты. Еңеүсе командаларға миҙалдарҙы Светлана Антипова, Ирек Зарипов кеүек Олимпиада чемпиондары тапшырҙы! Ә инде Баймаҡ баскетболсылары Элиза Исмәғилева, Анастасия Захватова, Нәйлә Сәйетҡолова Волга буйы федераль округы буйынса иң шәп уйынсылар тип тә танылды.

Шундай оло еңеү яулаған ҡыҙҙарҙы баймаҡтар ашҡынып көттө. Төнгө өстә тыуған ҡалаһына килеп еткән "Шторм" командаһын үҙәк майҙанда ҡаршы алыу ойошторолдо, улар өсөн салют бирелде. Бик арыған, әммә бәхетле йылмайған ҡыҙҙарҙы ата-әсәләре генә түгел, ә улар өсөн янып-көйгән баймаҡтар үҙ ҡосағына алды.

**Шулай итеп, беҙҙең ҡыҙҙар 30 мартта Ульяновск ҡалаһында "КЭС-Баскет" мәктәп баскетбол лигаһының Рәсәй финалында ҡатнашасаҡ. Хәҙер инде улар тотош Волга буйы федераль округының намыҫын яҡлаясаҡ. Бер көн генә ял итеп алған ҡыҙҙарыбыҙ тағы ла күнекмәләрен башланы. Әйҙәгеҙ, уларға бар Башҡортостан Республикаһы исеменән оло рәхмәтебеҙҙе еткерәйек. Афарин, "Шторм"!**

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

---

жегородка биҫтәһенән 35000 кубометрҙан артыҡ ҡар сығарылған. Кузнецов затоны һәм "Кооперативная поляна" биҫтәләрен һыу баҫыуҙан һаҡлаусы ваҡытлыса дамбаны төҙөкләндереү, һөҙәк яр буйҙарына 20 мең кубометр ҡом һәм ҡырсынташ һибеү ҡаралған.

Әммә ҡала халҡын ташҡындан һаҡлау буйынса күпме генә эштәр башҡарылһа ла, граждандарҙың хәүефһеҙлеге уларҙың үҙҙәренең был мәсьәләгә ҡарата мөнәсәбәтенән дә тора. Сөнки Өфөлә һуңғы тапҡыр иң хәүефле ташҡын былнан ун йыл элек булған, ҡала халҡы уның эҙемтәләре тураһында онотоп барыу сәбәпле, артыҡ әһәмиәт бирмәй, хатта иң кәрәкле әйберҙәрҙе - һыу, азыҡ-түлек, дарыуҙар запасын, кәмә әҙерләп ҡуйыуҙы ла хәстәрләмәй башлаған. Шуға күрә, бөгөнгө көндә ҡала районларының Граждандарҙы һаҡлау идаралығы хеҙмәткәрҙәре һәр йортҡа инеп, халыҡҡа яҙғы ташҡындан һаҡланыу саралары тураһында мәғлүмәт бирә, һыу баҫҡан осраҡта нимә эшләргә кәрәклеген өйрәтә, иҫкәртеү һәм аңлатыу эштәре алып бара. Идара хеҙмәткәрҙәре ташҡындан зыян күреү ҡурҡынысы янаған йорттарҙы страховкалау кәрәк булыуын да билдәләй. Былдай страховка милкенә матди ҡаза килгән кешеләргә сығымдарын тулыһынса ҡапларлыҡ түләүҙәр алырға мөмкинлек бирә. Рейдтар барышында белгестәр ташҡын булыуы ихтимал территорияла йәшәүселәрҙең исемлеген янынан тикшерә, хәүеф янаған осраҡта күпме кешегә ярҙам күрһәтеү кәрәк булыуын асыҡлай. Ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуһа, күсереп йөрөтөп булмаған ауырыуҙар, ауырлы ҡатындар һәм инвалидтар дауаханаларға урынлаштырыласаҡ, бүтәндәрҙе ваҡытлыса торлаҡ урындарына индерәсәктәр.

**"Ҡотҡарыу хеҙмәте 112"нең матбуғат хеҙмәте.**

---

*ҺОРАУ - ЯУАП*



### ИКЕ АҘНА ЭШЛӘРГӘМЕ?

**Миңә ҡулайлыраҡ шарттар менән икенсе урында эш тәҡдим иттеләр. Унда эш башлағанға тиклем миңә өйрәнергә һәм вазифа бурыстарымды үҙләштерергә ваҡыт кәрәк. Ләкин, белеүемсә, законға ярашлы, әлеге эш урынымда мин ике аҙна мотлаҡ эшләргә бурыслымын. Шуға күрә үҙ теләгем буйынса эштән китеү хаҡында ғариза яҙғандан һуң, ваҡытлыса сирләү ҡағыҙы алып, унан һуң хеҙмәт кенәгәмде алырға хоҡуҡлымынмы? Әллә ауырығанлыҡ ҡағыҙы ваҡытына ярашлы, минең эш көндәремде һуҙаҫактармы?**

- Үҙ теләгегеҙ буйынса эштән китеүегеҙ хаҡында әлеге эш биреүсене ике аҙна алдан иҫкәртергә бурыслыһығыҙ. Был хаҡта РФ Хеҙмәт кодексының 1-се өлөшө 80-се статьяһында әйтелгән. Халыҡта, ысынлап та, был ваҡытты "мотлаҡ эшләү ваҡыты" ("отработка") тип йөрөтәләр, ләкин ул дөрөҫлөккә тап килмәй. Был ваҡыт, әйтеп үтеүебеҙсә, етәксене алдан иҫкәртеү өсөн генә ҡаралған. Шуға күрә, ғариза яҙғандан һуң, теләгегеҙ буйынса әлегәсә ҡулланылмаған ялығыҙҙы (отпуск) йәки ваҡытлыса хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы алырға мөмкинһегеҙ. Ауырығанлыҡ ҡағыҙы ваҡытына ярашлы, эш көндәрегеҙ оҙайтыла алмай (РФ Хеҙмәт һәм мәшғүллек Федераль хеҙмәтенең 2006 йылдың 5 сентябрендәге 1551-6 һанлы хатына ярашлы). Әгәр ҙә әлеге эш биреүсегеҙ менән килешә алһағыҙ, ике аҙна үткәнен көтмәйенсә лә эштән бушатыла алаһығыҙ. Шулай уҡ ҡайһы бер осраҡтарҙа эштән китеү өсөн ике аҙна ваҡыт ҡуйылмай. Әгәр ҙә хеҙмәткәр уҡыу йортона ҡабул ителһә, хаҡлы ялға сыҡһа, эш биреүсе хеҙмәт килешеүен тиҙ арала өҙөргә бурыслы. Шулай уҡ эш биреүсе тарафынан хеҙмәт нормалары боҙолған саҡта ла хеҙмәткәр ике аҙна ваҡытты көтмәҫкә хоҡуҡлы.

### ҠЫҪҠАРТЫУҒА ЭЛӘККӘНДӘ

**2013 йылда, ойошма ябылыу сәбәпле, әсәйем ҡыҫҡартыуға эләкте. Ул өс ай уртаса эш хаҡы алды, ә ағымдағы йылдың ғинуарында уны эшһеҙ ҡалыусы итеп танып, мәшғүллек үҙәгенә иҫәпкә ҡуйҙылар. Сентябрҙә әсәйем ҡулын һындырҙы һәм ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы алды. Ошо ҡағыҙға ярашлы, уға түләүҙәр буласаҡмы һәм уны кем түләй?**

- Мәшғүллек үҙәгендә иҫәптә тороусыларға ауырыған ваҡытында ла эшһеҙ ҡалыу буйынса түләнгән пособие күләме һаҡлана. Йәғни әсәйегеҙгә ауырығанлыҡ ҡағыҙы буйынса түгел, ә быға тиклем алып килгән эшһеҙлек буйынса пособие түләнәсәк. Был хаҡта "Рәсәй Федерацияһында халыҡ мәшғүллеге тураһында"ғы РФ Законының 1-се пункты 28-се статьяһында әйтелә (1991 йылдың 19 апрелендә 1032-1 һаны аҫтында ҡабул ителгән).

Шулай ҙа әсәйегеҙ ауырығанлыҡ ҡағыҙы алып дөрөҫ эшләгән. Был уның мәшғүллек үҙәгендә ай һайын ҡаралған мотлаҡ теркәлеүгә килмәүенә нигеҙле сәбәп булып тора.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡан баҫымы күтәрелгәндә

❖ 1 литр һалҡын һыуға 5 ҡалаҡ шыршы ылыҫы, 2 ҡалаҡ гөлйемеш, 2 ҡалаҡ һуған ҡабығы һалып, 10 минут һүрән утта бешерергә. Һыуынғас, һөҙөргә, эҙ генә һыу ҡушырға була. Ошо төнәтмәне 2 көн эсергә. Дауаланыу оҙайлығы - 4 ай. Файҙаһы 5 көндән үк һиҙелә - баш ауыртмай башлай. 1 айҙан ҡайһы бер дарыуҙарығыҙҙы эсмәй ҡарағыҙ. Был дауа киҙеүгә ҡаршы яҡшы сара, эс ҡатыу ҙа бөтә, теш ҡаҙнаһы ла нығынып ҡаласаҡ.

### Хәл бөтһә...

❖ Хәлегеҙ бөтөп, арып, йонсоп китһәгеҙ, түбәндәге дауаны ҡулланып ҡарағыҙ. 1,5 литр һалҡын һыуға 1,5 стакан һоло, 1 ҡалаҡ бал, ярты лимон һалып ҡайнатырға һәм 3 сәғәт йылы урында төнәтергә. Һуңынан ҡалған ярты лимон ҡабығын ҡырғыстан ҡырып ҡушырға, 3 ҡат марля аша һөҙөргә һәм йылы көйөнсә эсергә.

❖ 1,5 литр һыуға 1 стакан һоло, стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендәге йөҙөмдө ҡайнатырға, 4 сәғәт төнәтергә, йылылай эсергә.

### Һыу

❖ Ярһып киткәндә 2 стакан һыу эсһәң, тынысланаһың.

❖ Ваннала йәки мунсала йыуыныу алдынан 1 стакан һыу эсһәң, ҡан баҫымы төшә.

❖ Йоҡлар алдынан 1 стакан һыу эсеп ятһаң, инсульттан һәм йөрәк өйәнәгенән һаҡлай.

❖ Ашар алдынан 1 стакан һыу эсеү аш һеңдереүҙе яҡшырта.

### Организмға нимә етешмәй...

❖ Организмға магний етешмәһә, сәтләүек, көнбағыш, ҡуҙаҡлылар - ясмыҡ, борсаҡ ашау файҙалы. Магний етешмәүен шунан белергә була - гел генә шоколад ашағы килә.

❖ Азот етешмәһә (гел икмәк ашағы килә), балыҡ, ит, сәтләүек ашарға.

❖ Глюкоза етешмәһә, тәм-том ашағы килә, был саҡта бал, татлы емешләк, йәшелсә һеҙгә ярҙамға килер.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

***✓ Үҙем урыҫ балаларын башҡорт теленә 19 йыл өйрәтеү дәүерендә уҡыусыларҙан да, ата-әсәләрҙән дә телебеҙҙе өйрәнеүгә ҡаршы бер генә яман һүҙ ишетмәнем, киреһенсә, ярҙамдарын, ихтирамдарын тойоп эшләнем.***



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҺЫЙЫР БУЛЫП...

## мөңрәп кил

**Башҡорт әкиәттәре, легендалары һәм риүәйәттәрендә үгеҙ йәки һыйыр ҙа изге хайуан булып һүрәтләнә. Улар кешегә әйләнеү һәләтенә эйә. "Урал батыр", "Ҡуңыр буға" эпостарында, "Үгеҙ", "Ҡуңыр һыйыр" әкиәттәрендә һөйләшә белгән үгеҙҙәр (һыйырҙар) кешеләр менән аралашып, улар менән бәйләнешкә инә.**

Бәлки, шуның өсөндөр ҙә төрлө ышаныуҙарҙа һыйыр кеше кеүек ҡабул ителә. Әгәр ҙә төшөңдә һыйыр күрһәң, сит кеше менән осрашырһың; һыйыр тәҙрәнән ҡараһа - ҡунаҡ килә. Әкиәттәрҙә, киреһенсә, кешеләрҙән, башҡа йән эйәләренең һыйырға әйләнеү күренеше йыш осрай.

Боронғо ҡараштар буйынса, кеше үҙе түгел, ә уның йәне изге йәнлек-хайуандарға әйләнә ала. Был ҡот ҡойоу йолаһында ла күренә: "Һыйыр булып мөңрәп кил!.." - тип әйтәләр ҡурҡҡан кешенең ҡотон ҡайтарғанда. Ошо уҡ күренеш башҡа ышаныуҙарҙа ла сағылыш таба: әгәр ҙә ҡурала һыйыр мөңрәй икән - ҡайғыға; төштә һыйыр һыуға инһә, шулай уҡ бәләгә, ауырыуға һ.б. Тимәк, борон башҡорттар кеше үлгән саҡта уның тәнен ташлап сыҡҡан йәнде һыйыр сүрәтендә һүрәтләгән.

Ҡайһы бер ырыу-аралар һыйырҙан йәки үгеҙҙән килеп сыҡҡан тигән ҡараш та йәшәй, был турала күбәләк-табын, ҡумырыҡ-табын, изел-ҡаңлы, бөрйән, ҡоҙғон-ҡатай, тамъян ырыуҙарының "Башмаҡ", табындарҙың "Ҡара үгеҙ", әйләләрҙең "Һыйыр", үҫәргәндәрҙең "Үгеҙ" аралары күрһәтеп тора. Лингвист В. Егоров фекеренсә, йәнәй ырыуының нигеҙендә боронғо төрки һүҙе "һыйыр" ята. Р. Кузеев тамъян менән түңгәүер этнонимдары "тана" һүҙенә тоташа, тип билдәләй.

Башҡорттар һыйырҙың енси ағзаларын еткә ташламай, һыйырҙың сыуынын да мотлаҡ ергә күмергә кәрәк, юғиһә, мал ҡото китә. Яңы йортҡа күсенгәндә тәүҙә ихатаға мал индерәләр, мал тиҙ арала ишәйеп китә. Ихатаның ишегенең аҫтына үгеҙ (һыйыр) тояғы күмеп ҡуйһаң, мал ҡубәйә. Башҡорт бер ҡасан да һыйырын һатҡанда уның муйынына бау бәйләп оҙатмай, ышаныуҙар буйынса, бау менән бергә мал ҡото ла китә. Ошо уҡ маҡсат менән мал һатҡанда уның йөнөн йолҡоп алырға тырышалар, ул йөндө аҙбарҙа ҡалдыралар.

Башҡорт фольклоры материалдарын өйрәнгәндә, ҡуңыр төҫтәге үгеҙ менән һыйыр малдың ҡото булып иҫәпләнеүе лә күҙгә салына. "Урал батыр" эпосында Ҡатил батшаның үгеҙе, Урал батырҙан еңелгәс, кешегә буйһоноп, үҙенең "ырыуын" Урал тауҙарына эйәртеп алып килә. "Ҡуңыр буға" эпосында ҡуңыр төҫтәге һыйырҙарҙың сихәтле һөт биреүе турала әйтелә. Шуға ла башҡорттар был төҫтәге малды ҡәҙерләгән, ҡуңыр төҫтәге үгеҙ малдың ҡото, тип иҫәпләнгән.

Һыйыр малы түллек символы ла. Баланы еңел тапһын өсөн, ауырлы ҡатын өс таҫҡыр һыйырҙы урап сыҡҡан, йәғни, мифик тәү әсә ҡурсыуы аҫтында иҡәнлектәрен күрһәткәндәр. Бала бүсер менән йонсоһа, уға ҡара һыйырҙың һөтөн эсергәндәр. Теш һыҙлағанда уға һыйыр мөгөҙө һалғандар.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ТЕЛ БУЛМАҺА, ИЛЕҢ ДӘ ЮҠ!



**(Башы 3-сө биттә).**

Республикабыҙҙа дәреслек төҙөү буйынса эштәр һаман булһа йоҡомһорай. Башҡорт теле уҡытыусылары тел уҡытыуға индерелгән һәр яңылыҡ һайын экспериментҡа дусар була: концепция юҡ, программа юҡ, дәреслектәр юҡ, тик эшләргә ҡушҡан бойороҡ ҡына бар. Ошо шарттарҙа кем нисек эшләй ала, шулай эшләй башлай. Төрлө милләт балаларына башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтә башлағанда ла шул уҡ хәл ҡабатланды: кем йырлата ла бейетә, кем уйындар уйнатып, дәрес үткәрә. Бала дүртле, бишле билдәләре алып, башҡорт телен өйрәнеүгә ҡуйылған бурыстарым ошолай икән, тип күҙ алдына килтерә. Иң әсендергәне - урыҫ балаһының аттестатында башҡорт теленән "дүрт" тә "биш", ә үҙ милләтебеҙҙең белеме күсемле һәм күсемһеҙ ҡылымдарҙы табып, алмаш, сифаттар аҫтына һыҙып (әйтерһең, килештәр ятлап, сифат, һан табып ҡына башҡортса һөйләшергә өйрәнә), өслө, дүртле билдәләре менән баһалана. Беҙҙең милләт балалары был юлы ла икенсе сортлылар рәтендә ҡалды. Кем ғәйепле бында? Үҙебеҙ, башҡорттар!

Беҙгә халыҡ менән эшләп, фекерендә иҫбат итеп өйрәнергә, аңлата белергә, үҙендең генә түгел, башҡа милләт кешеләрен эшләтерлек, ихтирам тойғоһо уятырлыҡ һығылмалылыҡ кәрәк. Үткән быуаттың 90-сы йылдары башында Хәйбулла районының Целинный ауылында милләте урыҫ булған ата-әсәләрҙең һорауы буйынса урыҫ балаларын башҡорт теленә өйрәтергә мәжбүр булғайным. Ул ваҡыттағы мәктәп директоры, район мәғариф бүлегенең хәҙерге етәксеһе Сиражетдинов Юлай Дидар улы менән, ата-әсәләрҙең талабы - бер, әммә был - эштең башы ғына икәнлеген иҫәпкә алып, башланғысыбыҙҙы өҙмәй дауам итергә ҡарар иткәйнек ул осорҙа. Киләсәгебеҙҙе уйлап, урыҫ кластарында уҡыған балаларҙың ата-әсәләренә, аҙаҡ буласаҡ урыҫ кластары балаларының ата-әсәләренә, һуңынан район мәктәптәренең директорҙары һәм завучтарына асыҡ дәрестәр күрһәтеп, эшлекле һөйләшеүҙәр үткәреү төрлө милләт балаларына башҡорт телен өйрәтеүгә өсөн үҙенә күрә оҫта реклама булды: район мәктәптәренең күбеһендә төрлө милләт балалары башҡорт телен өйрәнә башланы. Үҙем урыҫ балаларын башҡорт теленә 19 йыл өйрәтеү дәүерендә уҡыусыларҙан да, ата-әсәләрҙән дә телебеҙҙе өйрәнеүгә ҡаршы бер генә яман һүҙ ишетмәнем, киреһенсә, ярҙамдарын, ихтирамдарын тойоп эшләнем.

Бөгөн Башҡортостан юлдаш каналынан, Яҙыусылар союзынан, Мәғариф министрлығынан, "Китап" нәшриәтенән, китапханаларҙан, йәштәрҙән халҡыбыҙ бик күпте өмөт итә, сөнки дәрестәрҙе ҡыҫҡартыу - телеңде ҡыҫҡартыу түгел бит әле. БР Мәғарифты үҫтереү институты ла уҡытыусылар кәңәшенә ҡолаҡ һалһа, яҡшы булыр ине. Ябай ғына миҫал: башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса үткәрелгән олимпиадаларҙа уҡыусыларға һаман да әллә ҡасан төҙөлгән элекке һораүҙар бирелә. "Сәсәнлек" буйынса ярышта элек "Башҡортостанда иң ҙур йылға ниндәй?" тигәнерәк һораүҙар бирелә торғайны, хәҙер шиғыр ятлатып, сәсәнлек ярышы тип атауҙы ғәҙәткә индергәндәр. Билдәле авторҙарҙың шиғырҙарын һөйләтеү - сәсәнлеккә "тикшереү" шарты тип иҫәпләнә. Олимпиадала орфографик хаталар ебәреү - башҡорт телен насар белеүгә тиңләштерелә.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтер инем: ысын башҡорт булыу өсөн үҙ фекереңде яҡлай алырлыҡ белемең, иң мөһиме - ныклы рухың булыуы мотлаҡ. Ниндәй милләт кешеһе булыуына ҡарамаҫтан, әңгәмәсең менән уртаҡ тел табыу - үҙ баһаңды белеүгә тиң. Сәбәптәрҙе ситтән, кемдәндер эҙләп, ваҡыт үткәрмәй, көнсөллөктән арынып, һәр кем үҙ вазифаһында милләт баһаһын төшөрмәҫлек хеҙмәт итһә, телебеҙ ҙә йәшәр, үҙебеҙ ҙә ҡәнәғәт булырбыҙ. Ағас башына ҡунып, иҫ киткес матур итеп һайрағандан һуң, ергә төшөп, тиҙәк менән тукланған ҡошсоҡ хәлендә ҡалыуҙан һаҡланайыҡ. Берҙәм булайыҡ, бергә булайыҡ, тарҡаулыҡтан арынайыҡ, милләттәштәр!

**Нәзиә БИКБОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, хеҙмәт ветераны.**
**Сибай ҡалаһы.**

ӘЙТӘГҮР!

# АУЫЛДАР МЕНӘН АРАНЫ ӨҘМӘЙЕК

**Беҙ атайҙарҙан өлгө алдыҡ, балаларыбыҙ беҙҙең юлды ҡыуа, тип әйтә алаһыҡмы?**

**Нәфис АҠҠОЛОВ, хаҡлы ялдағы нефтсе-газ үткәреүсе, Өфө йылға порты хеҙмәткәре, шағир:** Беҙҙең олатайҙарға тормоштоң сәсәһенән бигерәк, әсеһен күберәк татырға тура килгәндер, тип уйлайым. Уларҙың йәшәгән ваҡыты дәһшәтле XX быуатҡа тура килә - Беренсе донъя һуғышы, революция, граждандар һуғышы, золом, Икенсе донъя һуғышы, хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу һәм башҡа ауырлыҡтар беҙҙең олатайҙар иңенә төшкән. Шулай булһа ла, улар үҙҙәрен бәхетле тип һананылар, ғүмер буйы бәхетле булып йәшәй белделәр. Ҡартатайым Әлшәй районының өс мәсетле Ташлы ауылында указлы мулла булған. Дингә ҡаршы көрәш башлангас, мәсеттәрҙе ватҡандар, муллаларҙы һөргөнгә ҡыуғандар. Ҡартатайым менән нәнәйемдең 13 балаһы булған. Уларҙың бишеһе генә үҫеп еткән. Шул 13 бала араһынан атайым бер генә малай булып, иҫән ҡалған. Күп нәҫелдәр ҡороған ваҡытта беҙең нәҫел дә ҡыл өҫтөндә генә тороп ҡалғандыр, тип уйлайым. Ҡартатайым уҡый-яҙа белгән, үҙ ваҡытына күрә арыу ғына зыялы кеше булған. Мин ике ҡартатайымды ла, ике нәнәйемде лә иҫләйем.

Атайым һуғышҡа тиклем Өфөлә мелиорация техникумында уҡыған, гидролог һөнәренә эйә булған. 1939 йылда уны әрмегә алғандар, Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итеп, офицер дәрәжәһенә етеүгә өлгәшкән. Хеҙмәт иткәс, кире ҡайтып, "Башмелиоводстрой"ҙа гидролог булып эшләгән. Хеҙмәте тураһында ул: "Мәләүездән башлап, Стәрлегә тиклем Ағиҙел йылғаһының үҙенен топографияға төшөрҙөк" - тип һөйләй торғайны. Шунда эшләп йөрөгән ваҡытында 1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышы башланып, атайҙы һуғышҡа алалар. Атай Мәскәү янындағы иң ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. 1942 йылдың башында оборона һуғыштары ваҡытында ҡаты яралана. Уның һөйләүе буйынса, беҙҙең атакаларҙы фашистар кире ҡаға, күп һалдаттар, командирҙар үлә. Шул ваҡыт ул командалыҡты үҙенә алып, батальонды атакаға күтәрә. Алға ташланған ваҡытта мина шартлап, уның ярсығы эсенән инеп, арҡаһынан үтәнән-үтә сыға. Был хәлдән һуң атай һуғышҡа яраҡһыҙ тип табыла. Йыл буйына госпиталдарҙа дауаланып, ауылға ҡайтып төшә. Военкомат уны хәрби әҙерлек буйынса уҡытыусы итеп тәғәйенләй. Һуғыш бөткәнсе ул йәштәрҙе хәрби хеҙмәткә әҙерләй. 1943 йылда ул үҙенән күпкә йәшерәк ҡыҙға - әсәйемә өйләнә. Улар ете балаға ғүмер бирә. Иң ҡыҙығы шул: әлеге яраһын алып, һуғыш яланында хәтһеҙ генә ваҡыт ятҡанда бер мөғжизә була. Беҙҙең ауылдаш Абдулла исемле ағай йүгереп барғанында атайымды күреп ҡала. "Тимергәле туған, был һинме", - тип туҡтап, уны ут эсенән алып сыға. Атай иҫән ҡала. Ошо хәл булмаһа, беҙ ҙә донъяға тыумаған булыр инек, ҡартатайҙың нәҫеленең дауамы булмаҫ ине.

Мин дә ауылдағы бөтөн ауырлыҡтарҙы күреп үҫкән баламын. Ғәҙеллек, намыҫ тигән төшөнсәләрҙе өйрәткән атай, ҡартатайҙарҙың өлгөһө үҙе тәрбиә ине. Атай менән әсәйгә эйәреп, эшләп үҫтек. Хәҙер ошоно уҡ балаларыбыҙҙа ла тәрбиәләйбеҙ. Алдашмаҫҡа, урлашмаҫҡа, насар ғәҙәттәрҙән алыҫ булырға, олоно - оло итергә, туғандарҙы хәстәрләргә, халыҡтан айырылмаҫҡа өйрәттек уларҙы. Шулай уҡ, физик яҡтан һау булһындар, тип тырыштыҡ. Шөкөр, бөгөн уларҙан бик ҡәнәғәтбеҙ, ысынлап та, улар ҙа беҙҙең юлды ҡыуа, тип әйтә алабыҙ. Бер улыбыҙ, бер ҡыҙыбыҙ бар. Быйыл беҙ олатай-өләсәй булдыҡ - ейәнсәребеҙ тыуҙы.

Ауыр, тиһәләр ҙә, үткән йылдар менән сағыштырырлыҡ та түгел бөгөнгө заманды. Кем донъя көтөргә тырыша - ул бер ваҡытта ла насар йәшәмәйәсәк. Хәҙерге йәштәрҙең бер сифаты күңелемде ҡыра - улар бөгөнгө көн менән генә йәшәй кеүек. Әлбиттә, уларҙы аңларға ла була - дәүләттән ярҙам юҡ кимәлендә. Беҙ йәш саҡта бушлай уҡытыу, эшкә урынлаштырыу, торлаҡ менән тәьмин итеү булһынмы - барыһы ла эшләнә ине. Нефть институтын тамамлағас, йүнәлтмә буйынса эшкә ебәрҙеләр. Шунда уҡ һәйбәт эш хаҡы, буйҙаҡ булһам да, ике бүлмәле фатир биреп ҡуйҙылар. Тағы шуға ла ҡыуанам - минең быуыным тыныс тормошта ғүмер итте. Шуға ил дә үҫте, халыҡ та ишәйҙе. Һуңғы ваҡыттағы үҙгәрештәр тормошто ла бер аҙ кире яҡҡа үҙгәртә төштө һымаҡ.

Нисек кенә булмаһын, йәштәргә шуны васыят иткем килә: милләттең бишеге - ауылда. Шуға ла ауылдарыбыҙҙы һаҡларға тырышырға кәрәк беҙгә. Ауыл имен булһа, генофонд та, тәрбиә лә юғары кимәлдә буласаҡ. Беҙҙең халыҡҡа ауыл менән ҡала араһындағы юлды һыуытмай, араларҙы өҙмәҫкә кәрәк. Ауылдан ҡалаға киткәндәр ҙә үҙенең тыуған ерен, ауылын ҡайғыртырға бурыслы.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

*ХӘТЕРКИТАП*

# БАШҠОРТТАР МЕНӘН ҠЫРЫМ ТАТАРҘАРЫНЫҢ...

## мәҙәни һәм әҙәби бәйләнештәре

**Ҡырымдың һәм Севастополь ҡалаһының Рәсәй Федерацияһы составына инеүенә бер йыл тулды. Ошо йәһәттән башҡорттар менән Ҡырым татарҙары араһындағы мәҙәни һәм әҙәби бәйләнештәргә ҡыҫҡаса байҡау яһау ниәтебеҙ.**



### Быуаттар төпкөлөнә тоташҡан...

Ике аралағы бәйләнештәр тарихы быуат төпкөлөнә барып тоташһа ла, ул махсус өйрәнелмәгән. XIX быуат һуңында - XX быуат башында Ҡырым ғалимы һәм нәшриәтсеһе Исмаил Гаспринскийҙың мәғрифәтселек эшмәкәрлеге башҡорт зыялыларының иғтибар үҙәгендә була. Башҡорт әҙәбиәте тарихы күп томлығының авторҙары башҡорттарҙы, пантюркизм идеологтары И. Гаспринский һәм Г. Баязитовтың артынан пассив эйәреүселәр, тип билдәләй. Ә билдәле башҡорт ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең XX быуат башында Хәбибназар Үтәки мәсетендә белем алыуын һүрәтләп, ағаһының Баҡсаһарайҙа И. Гаспринский нәшер иткән "Терджиман" гәзитен сыға башлағандан алып укыуы тураһында яҙа. Гәзиттең Урал-Волга буйы төбәгендә популяр булыуы тураһында ошо осорҙағы төрки телле матбуғат баҫмаларындағы мәҡәләләр һәм шаһдауҙар раҫлай.

Башҡорт ғалимы, мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың тарихта тәрән эҙ ҡалдырған Ҡырым осоро эшмәкәрлеге ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. 1887-1889 йылдарҙа ул Рәсәй Эске эштәр министрлығының махсус вакуф комиссияһында тәржемәсе булып эшләй. Тәүҙә ул Санкт-Петербургҡа килә, һуңынан Ҡырымға ебәрелә һәм унда бер нисә йыл йәшәй. Шағир һәм әҙәбиәтсе М. Өмөтбаев үҙенең ижадында Ҡырым ерендә булыуы тураһында мәғлүмәт ҡалдыра. РФА Өфө ғилми үҙәгенең ғилми архивында уның яҙмалары үҙенең шәхси фондында һаҡлана. Улар, башҡа әҫәрҙәре кеүек үк, тарихи һәм лингвистика белеме нигеҙендә яҙылған. Шулай уҡ Ҡырым тарихы тураһында мәғлүмәттәр ҙә бар. Аныҡлап әйткәндә, уларҙа уның И. Гаспринский менән осрашыуы, ҡәберҙәргә зыярат ҡылыуы, мәсеттәрҙә һәм башҡа иҫтәлекле урындарҙа булыуы сағылыш таба. Александр Пушкиндың шиғри әҫәрҙәрен, шул иҫәптән "Баҡсаһарай фонтаны" поэмаһын төрки телдәренә тәүгеләрҙән булып тәржемә итеүселәр ҙә башҡорт һәм Ҡырым татарҙары вәкилдәре булыуы иғтибарға лайыҡ. 1899 йылда Петербургта уны Ҡырым татары, нәшриәтсе Осман Акчокраклы, 1901 йылда Ҡазанда Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев баҫтырып сығара.

### Ер мәсьәләһе лә уртаҡ була

Өфөнән "Ғәлиә" мәҙрәсәһендә башҡа төрки халыҡтары вәкилдәре менән бер рәттән, Ҡырым студенттары ла белем ала. Мәҫәлән, 1916 йылда мәҙрәсә асылыуҙың 10 йыллығын байрам иткән тантаналар ваҡытында Ҡырым талиптары мәсеткә Брокгауз һәм Ефрондың күп томлы һүҙлеген бүләк итә. Шулай уҡ Өфө китапханаларында Ҡырымдан килтерелгән китаптар булыуы хаҡында ла мәғлүмәт бар.

Дәүләт Думаһында Ҡырым һәм башҡорт депутаттары берлектә эшләй. Мәҫәлән, 1907 йылда Ҡырым татарҙары Дәүләт Думаһына петиция бирә. Уның нигеҙенә Таврия губернаһы депутаты Решид Медиевтың Ҡырым татарҙарының йәмғиәт ерҙәре мәсьәләһе һәм башҡорттарҙың ергә милекселеге буйынса аналогия килтерелгән сығышы һалына. Мәғлүмәттәр буйынса, Ҡырымда ауыл общиналарына ҡараған 600000 дисәтинә һәм 200000 дисәтинә вакуф ерҙәре була. XX быуат башында уларҙан 79000 дисәтинә генә ҡала. Ҡалғандары юғары вазифа биләүсе чиновниктар тарафынан таланып бөтә. Ошоға бәйле Р. Медиев Башҡортостан тарихынан - ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Өфө һәм Ырымбур губерналарында йәшәгән башҡорттарҙың шәхси милкендә булған 1500000 дисәтинә ерҙең таланыуы тураһында миҫал килтерә. Ул: "...бына уларҙың фамилиялары: кенәз Ливин - дәүләт милке министры, 6200 дисәтинә алған, Маков - эске эштәр министры - 2313 дисәтинә, Замятин - Дәүләт советы ағзаһы - 2148 дисәтинә, Горемыкин - ғәмәлдәге статский советник - 1998 дисәтинә. Артабан уҡып тормайым, әммә тағы бер фамилия бар. Әфәнделәр, ул фамилияны атап китәм. Ул - Слезкин - Мәскәү жандарм идаралығы начальнигы. Ул 2070 дисәтинә ер алған. Бәлки, был ерҙәр ышаныслыҙ һәм шуға күрә уларҙы алырға кәрәк, тип уйлағандыр (һул яҡтан ҡул сабыуҙар, уң яҡтан хәрәкәт). Әфәнделәр, мин Рәсәй эсендә ергә изге милекселек барлыҡҡа килеүен күрһәттем". Шулай итеп, Таврия губернаһының мосолман депутаты Рәсәйҙең күп халыҡтарын ҡыҙыҡһындырған ер мәсьәләһе буйынса сығыш яһай. Моғайын, Февраль революцияһынан һуң тап ер мәсьәләһе үҙбилдәләнеш тураһында иғлан иткән башҡорттарҙың һәм Ҡырым татарҙарының әүҙемлегенә сәбәбе булғандыр. Был факт Төркиә матбуғатында ла сағылыш таба. 1917 йылда "Тюрк юрду" журналында "Ҡырымдарҙың һәм башҡорттарҙың мөстәҡиллеге" тигән мәҡәлә донъя күрә.

### Нәшриәт үҫешенә өлөш

Үрҙә әйтеп киткәнсә, ерҙән яҙҙырыу һәм тормош рәүешен үҙгәртеү башҡорттарҙың ярлылығына килтергән сәбәптәрҙең береһе булып, уларҙы революция хәрәкәттәрендә һәм Граждандар һуғышында әүҙем ҡатнашырға этәрә. 1919 йылда Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, башҡорт ғәскәрен Петербургты Юденич ғәскәренән һаҡлау өсөн ебәрәләр. Петербургта, Ильяс Бораганскийҙың - Ҡырым татарҙарының билдәле вәкиленең типографияһында башҡорт хәрбиҙәренән хәреф йыйыусылар төркөмө ойоштороla һәм башҡорт атлы дивизияһы өсөн "Салауат" гәзите сығарыла башлай. Был типография 1917 йылға тиклем төрки халыҡтарының тарихы һәм мәҙәниәте буйынса төрлө китаптар нәшер иткән була. Мәҫәлән, 1909 йылда унда билдәле ҡаҙаҡ шағиры Абай Ҡонанбаевтың беренсе китабы донъя күрә, Рәсәйҙең Көнбайышты өйрәнеүсе ғалимдарының хеҙмәттәре нәшер ителә. Тыуған еренә - Ҡырымға ҡайтыу мөмкинлеге булмағас, И. Бораганский типографияһы менән Башҡортостандың Стәрлетамаҡ ҡалаһына күсенә. Был хаҡта үҙенең "Хәтирәләр"ендә Ә. В. Туған уның исемен атамай ғына телгә ала. Башҡортостанға килгәндән һуң, И. Бораганский бында нәшриәт эшен етәкләй. Барлыҡ материалдарын урындағы нәшриәткә тапшыра, нәшриәт эшен йәйға һалырға ярҙамлаша. Һуңынан Өфөгә күсә һәм 72 йәштә булыуына ҡарамаҫтан, нәшерлек эшмәкәрлеген дауам итә.

### Араларҙы ялғаусы ептәр

XX быуаттың 20-се йылдарында башҡорт әҙәбиәтендә башҡорт яҙыусыларының Ҡырымға арналған бик күп мәҡәләләре һәм поэтик әҫәрҙәре донъя күрә. Уларҙың күбеһе Ҡырымда булып ҡайтҡандан һуң яҙыла. Шулай итеп, М. Ғафуриҙың, М. Хәйҙең, С. Ҡудаштың, Х. Кәримдең, Ш. Аҙһәмдең һәм башҡаларҙың айырым шиғырҙары һәм шәлкемдәре нигеҙҙә "Октябрь" әҙәби журналында баҫылып сыға.

Башҡорт театрының билдәле артисы В. Мортазин 1929 йылда Ҡырымда булғандан һуң үҙенең йыһазландырылған биһаһы булған Ҡырым татарҙары театры тураһында очерк яҙа.

30-сы йылдар аҙағына башҡорттар менән Ҡырым татарҙарының мәҙәни һәм әҙәби бәйләнештәре кәмеүе күҙәтелә. Күрәһең, ул милли зыялыларға ҡағылған репрессияларға бәйлелер. Ә 1944 йылда Ҡырым татарҙары депортацияланғандан һуң бәйләнештәр бөтөнләй юғала.

Бары тик XXI быуатта ғына мәҙәни хеҙмәттәшлек тергеҙелә башлай. Ҡырым артистары Өфөлә үткән халыҡ-ара фестивалдәрҙә ҡатнаша. 2010 йылда "Урал моңо" Халыҡ-ара фестивалендә "Бельбек" ансамбле Гран-при яулай. "Туғанлыҡ" төрки телле театрҙарҙың Халыҡ-ара фестивале сиктәрендә үткән ғилми симпозиумдарҙа бер нисә тапҡыр Ҡырым татарҙары театрының тарихы буйынса докладтар яңғырай. "Ағиҙел" журналында билдәле Ҡырым татары шағир Селим Шакирҙың шиғырҙары донъя күрә. 2012 йылда арҙаҡлы Ҡырым татары шағир Б. Чобан-заденың тыуыуына 120 йыл тулыуға бәйле ошо уҡ журналда уның эшмәкәрлеге тураһындағы мәҡәлә менән бергә шиғырҙары ла баҫыла.

**Әхәт СӘЛИХОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Исламға тиклем булған дини йолаларҙың сағылышы

Башҡорттарҙа, И. Г. Георги мәғлүмәттәре буйынса, сихырсылар ҙа булған. Улар үҙҙәре хаҡында, үткәнде һәм киләсәкте беләбеҙ, тип белдергән. Алектров һүҙҙәренсә, башҡорттар шулай уҡ ҡара китапсыларға ла ышанған. Улар ҙа киләсәкте күрә алған, был өсөн тамуҡтың үҙендә яҙылған ҡара китапты файҙаланған, шайтандар менән дуҫ йәшәгән. Теләгән ваҡытта ҡара китапсы шайтанды мөгжизәләр тыуҙырырға ҡуша алған: ҡомдан, ҡояш нурҙарынан арҡан иштергән, ай һәм йондоҙҙарҙы тотторған, ҡойондарҙы туҡтаттырған. Ҡара китап ярҙамында уның хужаһының бар теләге шунда уҡ шайтан тарафынан тормошҡа ашырылған. Әгәр аҡса кәрәк булһа, шайтан уның кеҫәһен һәм һандығын алтын-көмөш менән тултырған, һөйөү талап ителгәндә, иң матур ҡыҙҙар килтерелгән. Вафаты яҡынлашыуын һиҙгәндә ҡара китапсы китаптарын үҙе теләгән кешегә тапшырған һәм шайтан менән идара итеү ошо кеше ҡулына күскән.

Сихырсылар рухтар менән аралашҡан һәм кешеләргә зыян ғына түгел, уларҙы өшкөрөү, үлән тамырҙары менән дауалау, сирҙәрен елгә осороу ярҙамында дауалап, файҙа ла килтергән. Башҡорттар сихырсыларҙан ҡурҡҡан, әммә ауыр сиргә юлыҡҡанда уларға мөрәжәғәт иткән. Сихырсылар кешене дауалай ҙа, шулай уҡ кешегә сир ебәреп, уны бер нисә көн эсендә үлтерә лә алған.

Бағыусылар төрлөсә күрәҙәлек иткән: һыу һалынған һауытҡа ҡараған, йылғаға тапсыҡ ташлап, уның нисек ағыуын күҙәткән, йомғаҡ тағатҡан, ноҡот бүлгән һ.б. Былар барыһы ла юғалған мал-мөлкәтте табыу, урлаған кешене асыҡлау маҡсатында эшләнгән. Алектров яҙыуынса, кемдеңдер ҙур күләмдә ниmәһелер юғалһа, хужа өйөнә үҙе шикләнгән кешеләрен саҡырып, өҫтәлгә яһаулы ҡорал ҡуйған да, һәр берәһенә килеп, ҡоралдың көбөгән ауыҙына төрәп, тәтегә баҫырға бойорған. Йәнәһе, ҡорал ғәйепле кешене генә атасаҡ. Бурҙар, ҡайһы бер осраҡта, ҡурҡыштарынан шунда уҡ ғәйептәрен таныған.

Башҡорттарҙың күҙаллауҙары буйынса, кешеләр рухтар менән аралашҡан, ҡайһы берҙә хатта рухтар кешелә йәшәгән. Ундайҙарҙы муллалар өшкөрөп дауалаған. Муллаларҙан тыш, мулла-күрәҙәләр ҙә булған. Улар төнөн ендәрҙе күргән, улар менән алышҡан. И. И. Лепехин һөйләүенсә, шайтан күрәҙәне йөҙәр саҡырымдан саҡырып килтергәндәр.

Минең үҙемә лә бөрйән ырыуының бер башҡортонан уның нисек итеп сирле ҡатынынан шайтанды ҡыуып сығарыу өсөн күрәҙә саҡырыуын һөйләгәнен яҙып алырға тура килде. Был осраҡта күрәҙә үҙенә өс ярҙамсы алып, һауаға ҡамсы һәм сәнскеле сыбыҡ бәйләмә менән һуғып, енде ҡыуған. Шайтанды алыҫ урманға ҡыуып, ул ярҙамсылары менән икенсе юл буйлап ҡайтҡан.

Ябай кешеләрҙән айырмалы, күрәҙә кеше образына инген пәрейҙе, хатта баҙарҙа, кеше ҡайнап торған урында, күрә алған.

***✓ Беҙ балаларҙы "Бер ваҡытта ла эсмәйәсәкмен!" тип ант иттерҙек. Кемгәләр был хәл мәрәкә лә тойолор, ләкин беҙ бала сағыбыҙҙы иҫкә төшөрәйек әле. Октябрят, пионер, комсомол сафтарындағы анттарыбыҙ мәрәкә инеме ни?***



**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһының республикала эш башлауына кисә генә кеүек. Әммә ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә уларҙың милләттәштәребеҙҙе айыҡтырыу йүнәлешендәге эшмәкәрлеге, цунами кеүек, тотош дәүләтебеҙҙе ҡаплап килә. Ойошма башлаған "Айыҡ ауыл" конкурсы хәҙер республика кимәленә күтәрелеп, барлыҡ Башҡортостанға таралды. Ә инде ыңғай тәжрибәне Төмән өлкәһе шунда уҡ күтәреп алып, конкурсты беренсе йылында уҡ рәсми рәүештә иғлан итте. Новосибирск өлкәһе, Удмуртстан, Татарстандың ҡайһы бер ауылдары үҙҙәрендә эш башланы. Ысын мәғәнәһендә республикабыҙ айыҡ тормошто пропагандалауҙа авангардта бара һәм башҡалар тәжрибә туплар, өлгө алыр, бер-беренә терәк булыр майҙансыҡ булып тора. Редакция ҡунаҡтары - "Айыҡ ауыл" республика конкурсы еңеүселәре - Учалы районының Миндәк ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Ришат ҒИБӘҘУЛЛИН, Федоровка районы Бала Сытырман ауылы биләмәһе хакимиәте башлығы Мәрғизә АРЫҪЛАНОВА менән дә һүҙҙе ошо юҫыҡта дауам итәбеҙ.**

# АЙЫҠЛЫҠҠА

## үҙ-үҙеңде

**▸ Театр гардеробтан башлана, тиһәләр, айыҡлыҡҡа юл нимәнән башлана?**

**Р. Ғибәҙуллин:** Беҙҙең район был конкурста беренсе йыл ғына ҡатнашмай. Быға тиклем Ахун, Байрамғол, Амангилде ауыл биләмәһе Советтарына ҡараған ауылдар ҡатнашты, амангилделәр былтыр номинацияға лайыҡ булды. Дөйөм әйткәндә, районда айыҡ йәшәү һәм ауыл халҡын һаҡлап алып ҡалыу өсөн шундай дөйөм эш алып барыла. Ә быйыл финалға сыҡҡан Баттал ауылына килгәндә, совет заманында ла, уҙған быуаттың ҡатмарлы 90-сы йылдарында ла ул үҙе айырым бер дәүләт кеүек йәшәне. Нисек бар, шулай әйтәм: бында халыҡ бик тырыш. Ауыл "Байрамғол" совхозында алдынғы бүлексәләрҙең береһе булып торҙо. Күп итеп һарыҡ аҫыранылар, эре мал тоттолар. Һәр ваҡыт район, республика, союз күләмендә еңеүсе булып йөрөнөләр. Социалистик Хеҙмәт Геройы - Әхмәтйәнов Янъыбал Шаһыбал улы, хәҙер мәрхүм инде, ошо ауылдан. Унан башҡа, "Ҡыҙыл Байраҡ", Ленин ордендары кавалерҙары бар. Ауыл халҡы әле лә ана шул матур йәшәү ынтылышын юғалтмаған, һаман да тырышып йәшәй. Әлеге ваҡытта Батталда 111 йорт иҫәпләнә, йәштәрҙең 95 проценты тиерлек ауылда ҡала, ситкә китмәйҙәр. Уҡырға китеүселәр иһә, ҡулдарына урта, юғары белем тураһында диплом тотоп, кире ҡайта. Уларға ҡайтырға стимул: ауыл хужалығындағы эшҡыуарлыҡ. Игенселек менән шөғөлләнәләр. Етештергән продукцияны үҙҙәренән арттырып, күрше-тирә ҡалаларға алып барып һаталар һәм шул арҡала халыҡ етеш йәшәй. Беҙҙең ауыл тирәһендә буш баҫыуҙар, яландар юҡ. Уларҙа йә иген сәселә, йә бесәнлек. Тотош ауылға 60 берәмек ауыл хужалығы техникаһы бар. Һәр йортта тиерлек сит ил маркалы еңел машина. Етештереүсе хужалыҡ булмаһа ла, халыҡ бер ҡайҙа ла эшләмәй тип әйтеп булмай. Улар, хәҙергесә итеп әйткәндә, сит ағайға түгел, үҙҙәренә эшләй.

Ауылыбыҙҙа 2002 йылда барлыҡҡа килгән "Осҡон" өлгөлө бейеү ансамбле бар. Ул 2012 йылда "Еҙ үксә" республика конкурсында Гран-при яуланы. 2002 йылда "Төҙөк ауыл" конкурсында еңеп сыҡтыҡ, 2008 йылда БСТ телевидениеһы үткәргән "Төҙөк ауыл" телеконкурсында ла еңеү яуланыҡ. Мәктәбебеҙ ҙә бик данлыклы. Уҡыу буйынса ла, олимпиадалар буйынса ла районда беренселәр рәтендә тора. "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыуға ла дәррәү күтәрелеп риза булды ауылдаштар.

**М. Арыҫланова:** Беҙ республикала "Айыҡ ауыл" конкурсы барғанына хәбәрҙар булып, уның нисек үтеүен, унда нисек ҡатнашырға икәнлеген ҡарап, күҙәтеп килә инек. Был аҙымға бик оҙайлы килдек. Үҙем күп йылдар йәмәғәт эштәрендә ҡатнашып килдем, мәктәп директоры булып эшләнем һәм эскелектең оло афәт икәнен үҙ елкәмдә татып белә инем. Шуға ла был конкурста ҡатнашыуға районда беренселәрҙән булып Яңы Яуыш ауылы менән ҡатнашырға йөрьәт иттек һәм матур һөҙөмтәгә өлгәштек. Быға йылдар буйы әҙерләнеү, айыҡлыҡҡа йәйлап килеү ҙә ярҙам иткәндер.



Республика буйынса үткәрелгән семинар-кәңәшмәләрҙә ҡатнашып, уҡыуҙарҙа булып, башҡа райондар тәжрибәһе хаҡында һорашып-белешеп йөрөнөк. Конкурста ҡатнашыуға Яуыш ауылын һайлау осраҡлы булманы. Сөнки унда бөгөн сәләмәт тормош алып барған, матур итеп донъя көткән ғаиләләр бик күп. Был ауылда, ысынлап та, сәмле халыҡ йәшәй. Мәҫәлән, кемдер йортон төҙөкләндерҙе икән, күршеһе лә ошо эшкә тотона. Мәктәп тә районда алдынғыларҙың береһе. Бөтөн район, республика конкурстарында сығыш яһайҙар. "Айгүҙәл" йыр ансамбле эшләй. "Ынйылар" балалар ансамбле бар. Халыҡ мәҙәниәтҡә ныҡ ынтыла. Шәжәрә байрамдары, айыҡ туйҙар үтеп тора. Ауылда шулай уҡ "Айыҡтар клубы" ойоштороҡ. Унда эскелектән арынып, айыҡ тормошҡа аяҡ баҫҡан кешеләр инде. Был бик ҙур эш һәм ҙур һөҙөмтә тиер инем. Улар үҙҙәренең йыйылыштарын үткәрә, аңлатыу эштәре алып бара, сафтарын арттыра. Шуныһы ҡыуанислы: клуб ағзаларының барыһы ла ир-егеттәр. Ә ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы эскелек менән беҙҙең ағинәйҙәр көрәшә.

**▸ Башҡорт халҡының бер сифаты - ул сәм. Үҙенең ерлегендә башҡорт барыбер тырышып йәшәй, бер-береһенә ярҙам итеп донъя көтә, уға, мәҫәлән, бөгөнгө санкцияларҙа ҡағылмаған кеүек - өҫтәленән һый өҙөлмәй. Шуға ла беҙгә халҡыбыҙҙың ошо үҙ-үҙен һаҡлай торған механизмын - сәмен уята йөрөргә кәрәктер ул. Уны һеҙ, урындағы етәкселәр, атҡара алаһығыҙ бит инде...**

**Р. Ғибәҙуллин:** Тап шулай. Беҙҙең Баттал ауылы халҡы бик әүҙем, сәмсел, тинем бит инде, беҙ уларҙың ошо әүҙемлегенә, төрлө конкурстарҙа ҡатнашыу ынтылышына ярҙам итергә, хуплап торорға тырышабыҙ. Батталда "Мин вертолет һатып алһам, күреп тороғоҙ, бер нисә йылдан күршем самолет һатып аласаҡ", тигән лаҡап бар. Быны ошо ла халыҡтың сәмселлеге тураһында һөйләй. Тик сәм тигәнде көнсөллөк тип аңлай күрмәгеҙ. Ауылдаштар бер-береһенә ярҙам итеп, бер-береһенә таяныс булып, тырышып йәшәйҙәр. Эшсәнлектәре менән өлгө булып торалар. Улар телгә лә маһирҙар. Кеше менән аралаша, шаярта беләләр. Күңелдәре һәр саҡ күтәренке. Ҡыҫҡаһы, оптимистар. Улар менән йәш етәксе булыуымды иҫәпкә алыпмы, әллә минең күңелде төшөрмәҫкә теләпме, йыш ҡына шулай ти: "Һин, ҡустым, беҙҙе ҡышын юл менән тәьмин итһәң, электр уты булһа, һыу булһа - беҙгә шул етә, ҡалғанын беҙ үҙебеҙ эшләйбеҙ, эш тип тә, башҡаһы тип тә ҡайғырма. Аллаға шөкөр, мәктәбебеҙ эшләй, магазиндарыбыҙ эшләй, ҡалғанын үҙебеҙ хәл итәбеҙ". Халыҡ хәҙер үҙенә эшләргә өйрәнде. Хатта ҡабаттан колхоз-совхоз ойоштороһа ла, унда бармаясаҡбыҙ, тиҙәр.

**М. Арыҫланова:** Күп ерҙәрҙә хужалыҡтар бөтөрөлөп, юҡҡа сыҡҡайны, халыҡ нимә эшләргә белмәй, бер аҙ аптыранып ҡалды ул. Был әллә ни оҙаҡҡа барманы. Тамырҙарҙағы теге сәм тигән нәмә уянып, халыҡты ергә тағы ла ныҡыраҡ беректерҙе. Һәр хәлдә, беҙҙең Бала Сытырман ауыл биләмәһендә, Яңы Яуыш ауылында халыҡ ситкә сығып, ҡайҙандыр бәхет эҙләп йөрөмәй. Улар ауылда ҡалып, үҙ көндәрен үҙҙәре күрергә, мал аҫырап, баҡса үҫтереп, донъя бөтәйтергә өйрәнде. Бер йортта ғына бер нисә техника тора. Техниканы һәр кем үҙе һатып ала. Буш ятҡан ерҙәр юҡ, һәр береһе эшкәртелеп, файҙаланыла. Ауылыбыҙҙы шул тиклем матур, төҙөк йорттар биҙәй.

**▸ "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашҡас, Рәсәй кимәлендә айыҡлыҡ өсөн көрәшеүсе зыялы ғалимдар Ждановтың, Кривоноговтарҙың семинарҙарында булғанһығыҙҙыр, моғайын. Уларҙың төп фекере бөгөн эскән кешене айнытыуға түгел, ә үҫеп килеүсе йәш быуынды тәрбиәләүгә йүнәлтелә. Ошо йүнәлештә балалар менән ниндәй эштәр алып бараһығыҙ?**

**М. Арыҫланова:** Күп йылдар мәғариф системаһында эшләп, ата-әсәләр менән аралашып йөрөгән кеше буларак, ошо яман ғәҙәттән балаларҙы аралау тураһында мин күптән уйланам. Мәҫәлән, үҙе тәмәке тартҡан, спиртлы эсемлектәр ҡулланған, сәләмәт тормошҡа битараф кешенең балаһына "Эсмә, тартма, алама ғәҙәттәргә ылыҡма", тип әйтеү генә етмәй, тағы ла ниндәйҙер йоғонтоло саралар эҙләп итергә кәрәк. Мәҫәлән, 1 сентябрҙә Яңы Яуышта "Тәмәкегә, араҡыға, наркотиктарға - юҡ!" тигән акция үткәрҙек. Унда бөтөн ауыл, төрлө быуын вәкилдәре, хатта район хакимиәте етәкселәре лә ҡатнашты. Йыйылған халыҡҡа республика семинарынан алып ҡайтҡан "Бер алдаҡ тарихы" тигән видеофильмды күрһәттек. Ундағы мәғлүмәт иҫ китерлек. Фильмды ҡараған балалар алкоголь ағыуының афәтен үҙ күҙҙәре менән күрҙе. Сара һуңында беҙ балаларҙы "Бер ваҡытта ла эсмәйәсәкмен!" тип ант иттерҙек. Ошо уҡ антты өлкән быуын да ҡабатланы. Кемгәләр был хәл мәрәкә лә тойолор, ләкин беҙ бала сағыбыҙҙы иҫкә төшөрәйек әле. Октябрят, пионер, комсомол сафтарындағы анттарыбыҙ мәрәкә инеме ни? Улар барыбер ҙә беҙҙең холоҡто формалаштырыуҙа оло роль уйнаны бит. Ә хәҙер беҙ балаларға нимә ярай, нимә ярамай икәнен дә аңлатырға онотабыҙ. Шуға күрә, ауылдарҙа балаларҙы, йәштәрҙе лә айыҡлыҡ өсөн көрәшкә йәлеп итеү бик урынлы, тип уйлайым. Иң тәүҙә айыҡлыҡ буйынса саралар улар менән алып барылырға тейеш.

**Р. Ғибәҙуллин:** Мәрғизә апай әйткәндәргә ҡушылам: айыҡлыҡ өсөн көрәш иң тәүҙә балалар, йәштәр араһында алып барылырға тейеш. Ә беҙ, өлкәндәр, уларға айыҡ йәшәү рәүеше күрһәтергә тырышырға тейешбеҙ. Беҙҙең Баттал ауылы тап шул ҡағиҙә буйынса йәшәй ҙә инде. "Айыҡ ауыл" конкурсында ла ҡатнашҡас, халыҡ тағы ла ныҡыраҡ әүҙемләште һәм яуаплылыҡты арттырҙы. Туйҙар эскеһеҙ үткәрелә. "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы, һабантуйҙар ҙа эскеһеҙ үтә, беҙ хәҙер халҡыбыҙҙың милли эсемлектәре буҙа, ҡымыҙға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Һуңғы 4-5 йылда Баттал ауылында Ислам дине, шәриғәт ҡанундары буйынса йәшәргә ынтылыу көсәйә. Йәштәр, мәктәп балалары ла дингә ылыға. Был бик яҡшы күренеш, тием, сөнки динебеҙҙә бит йәшәйеш өлгөһө. Үкенескә күрә, ауылда әлегә мәсет юҡ, әммә, Алла бирһә, алдағы йылдарҙа иман йортон төҙөп ултыртып ҡуйырбыҙ, тигән ниәттәбеҙ. Иман булған ерҙә ил бөтмәҫ, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит.

**М. Арыҫланова:** Беҙҙең ауылда ла мәсет юҡ, һәм халыҡтың "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыуының тағы бер әһәмиәте шунда булды: халыҡ йыйылыш үткәреп, мәсет урынын билдәләп, таштар һалып ҡуйҙылар.

**▸ Тыйылған емеш татлы була, тигән кеүек, нимәнелер тыйһаң, халыҡ уның икенсе юлдарын эҙләй башлай. Ауылдарҙа көмөшкә ҡыуыусылар менән нисегерәк итеп көрәшергә мөмкин?**

***Батталда 111 йорт иҫәпләнә, йәштәрҙең 95 проценты тиерлек ауылда ҡала, ситкә китмәйҙәр. Уҡырға китеүселәр иһә, ҡулдарына урта, юғары белем тураһында диплом тотоп, кире ҡайта. Уларға ҡайтырға стимул: ауыл хужалығындағы эшҡыуарлыҡ. Игенселек менән шөғөлләнәләр. Етештергән продукцияны үҙҙәренән арттырып, күрше-тирә ҡалаларға алып барып һаталар һәм шул арҡала халыҡ етеш йәшәй. Беҙҙең ауыл тирәһендә буш баҫыуҙар, яландар юҡ. Уларҙа йә иген сәселә, йә бесәнлек. Тотош ауылға 60 берәмек ауыл хужалығы техникаһы бар. Һәр йортта тиерлек сит ил маркалы еңел машина.***

*✓ Беҙҙең халыҡтың борондан килгән тәрбиәһе шул: атай-әсәй баланы үҫтереүен үҫтергәс, бәхетле ҡартлыҡта йәшәргә тейеш. Ҡартайған көнөндә уны балалары ҡарарға, тәрбиәләргә тейеш.*

# ЮЛДЫ...

## еңеүҙән башла

**М. Арыҫланова:** Беҙ көмөшкә ҡойорға яратыусыларҙың өйҙәренә йөрөйбөҙ. Абруйлы кешеләрҙең, ағай-апайҙарҙың үтемле һүҙе менән уларға йоғонто яһарға тырышабыҙ. 1 сентябрҙәге бая әйтеп үткән акцияла, дини байрамдарҙа, ял көндәрендә магазиндарҙа һыра һатыуҙы тыйырға, тигән ҡарар ҡабул иттек. Араҡы беҙҙә бөтөнләй һатылмай. Магазин хужалары ла сикләүҙәргә ҡолаҡ һала, тыңлайҙар. Халыҡ бындай күренешкә күнегеп тә бөттө.

Эскелек, әлбиттә, тиҙ генә юҡҡа сыҡмаясаҡ. Әммә тамсы тама-тама ташты тишкән кеүек, был хәрәкәт тә ҡасандыр үҙенең маҡсатына өлгәшәсәк. Ә инде был яуызлыҡҡа, еңеп булмай, тип, ҡул һелтәп ҡуйһаҡ, халыҡ битарафҡа әйләнәсәк. Хәҙер, әйтеүҙәренсә, асыҡтан-асыҡ эсеп, иҫереп, ауыл буйында йөрөгән кеше күренмәй. Эскән, көмөшкә һатҡан кешеләр бар, әммә улар бармаҡ менән һанарлыҡ. Улар менән һөйләшеүҙәр алып барылғас, асыҡтан-асыҡ үҙ шөғөлдәрен, кәсептәрен ҡыуа алмайҙар. Ни тиһәң дә, ауылдаштарынан оялалар, тайшаналар. Әле бына Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов етәкселегендә законһыҙ әйләнештәге алкоголь сауҙаһына ҡаршы көрәш тураһында БР Хөкүмәте ултырышы булып үтте бит инде. Республика Башлығының был киҫәтеүҙәренән һуң халыҡҡа төрлө шикле сифаттағы алкоголле эсемлектәр, дарыу төнәтмәләре һатыусы алыпһатарҙар бер аҙ тыйылыр, урындағы хоҡуҡ һаҡлау органдары ла был көрәшкә иғтибарҙы арттырыр, йәмәғәтселеккә ярҙам итер, тип ышанғы килә.

**Р. Ғибәҙуллин:** Мин дә шатлыҡ кисерҙем был ултырышта яңғыраған киҫәтеүҙәрҙән һуң. Юҡһа, ысынлап та, сифатһыҙ араҡы, көмөшкә менән сауҙа итеү йылдан-йыл сәскә ата ауылдарҙа, уларға ҡаршы көрәшеүсе юҡ. Хәҙер, бәлки, боҙ ҡуҙғалыр.

Әлбиттә, беҙҙең Баттал ауылында көмөшкә ҡойоусылар юҡ тиерлек. Әммә ауылда эсмәйҙәр, тип тә әйтеп булмай. Эсеүселәр бар, әммә беҙ улар менән профилактик эштәр алып барабыҙ. Ниндәй ысулдар ҡулланырға икәнен хакимиәттәр үҙҙәре хәл итә инде. Батталда бер аҙ "ҡырын һалырға" яратҡан, ике балаһы булған бер ғаилә бар ине. Бер нисә йыл рәттән ҡаты ғына итеп һөйләшеүҙәр алып барҙыҡ, һөҙөмтә булмағас, ғаилә башлығына: "Ағай, өлкән малайыңды үҙемә алам, үҙем тәрбиәләйем, ә һеҙ эсеүегеҙҙе ҡыҫҡартаһығыҙ. Әгәр тыңламайһығыҙ икән, балаларҙан бөтөнләй ҡолаҡ ҡағасаҡһығыҙ", - тиергә тура килде. Мин үҙем Миндәктә йәшәйем. Үҙемдең ике бала эргәһенә уларҙың малайын үҙемә тәрбиәгә алдым, ул беҙҙә йәшәй, мәктәпкә йөрөй. Ял көндәрендә тыуған йортона ҡайтып килә. Ыңғай һөҙөмтә бар: бала ла тырыша, ата-әсәһе лә эскенән тыйылды. Быны нимәгә һөйләйем, үҙеңдең өлгөң менән дә һабаҡ бирергә мөмкин. Бөтөн кешегә бер төрлө мөнәсәбәт менән эште алға алып барып булмай, һәр кемдең күңеленә айырым асҡыс табырға кәрәк.

▸ **Йәшерен-батырыны юҡ, милләттәштәребеҙ араһында битарафлыҡ та бик көслө. Битарафлыҡ һаҙлығына бер батһалар, уларҙы тартып сығарыуы бик ауыр. Башҡа райондар, башҡа ауылдар халҡы ла "Айыҡ ауыл" конкурсына ҡушылһын өсөн улар күңеленә нисек итеп дәрт осҡоно һалырға?**

**М. Арыҫланова:** Һәр ауылда үҙ артынан эйәртеүсе кешеләр - лидерҙар булыуы бик мөһим. Үҙе башлап эшләп күрһәтеп, башҡаларҙы артынан эйәртеүсе, уларға тынысланырға ирек бирмәүсе кешеләр кәрәк. Минең башымда хәҙер "Киләһе йылда был конкурста ниндәй ауыл менән ҡатнашырмын?" тигән һорау тыуҙы һәм мин шул ауылдан әүҙем кешеләрҙе барлай башланым. Ул кешеләр абруйлы, халыҡ уларҙың артынан эйәрерлек, һәр ерҙә лә һүҙҙәре үтерлек булырға тейеш. Эште башланым икән, аҙағынаса еткерәм, тигән сәмсел кешеләр кәрәк. Ысын мәғәнәһендә кеше тигән исемде лайыҡлы йөрөтөүселәр булғанда, теләһә ниндәй эштең дә осона сығырға мөмкин.

**Р. Ғибәҙуллин:** Бәхеттең әҙер рецебы булмаған кеүек, бында ла халыҡ менән нисек эшләүҙең әҙер рецебы юҡ. Сөнки һәр төбәктең үҙенең менталитеты һәм шуға ярашлы эш алып барырға кәрәк. Бер ауылдың халҡы мотлаҡ икенсе ауылдыҡынан айырыла. Мәҫәлән, беҙҙең Миндәк ауыл биләмәһе - элекке шахтерҙар ҡасабаһы. Унда төрлө милләт вәкилдәре йәшәй. Уларҙы ниндәйҙер дөйөм эшкә ойоштороуы ул тиклем еңелдән дә түгел. Ә Баттал, Озерный яҡтарында - башҡорттар. Ике йылдан ашыу эшләйем, уларҙа һәр йыл "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" йәки Шәжәрә байрамдары үткәрәбеҙ, халыҡ үҙе тырышып йөрөй. Әҙерлек ваҡытында ауылдар матурланып ҡала. Үрмәксенән - күрмәксе, тигәндәй, ҡайһы бер ауылдар, беҙҙең дә шундай сараларҙа ҡатнашҡыбыҙ килә, тип мөрәжәғәт итә, бер-береһенән ишетеп, тартыла. Батталдар конкурста ҡатнашҡайны, хәҙер күрше ауылдар ҡыҙыҡһына башланы, килеп, ҡарап, тәжрибә өйрәнеп ҡайталар. Был конкурсҡа ни тиклем күберәк ауылдар ҡушылһа, шул тиклем яҡшыраҡ.

Икенсенән, балалар баҡсаһынан алып, мәктәпте тамамлағанға тиклем ата-әсәләрҙең һәм тәрбиәселәрҙең төп бурысы - балалар араһында лидерҙарҙы табыу, уларҙы артабан үҫтереү. Әгәр спортҡа, йыр-бейеүгә, фәнгә, идара итеүгә һәләте бар икән, уларҙы ана шул өлкәгә йүнәлтеп, артабан ҡалаға ебәреп уҡытып, кире ауылға ҡайтырлыҡ тәрбиә бирергә кәрәк. Хәҙер күптәр юғары уҡыу йортон тамамлай ҙа, шунда уҡ етәксе булырға ынтыла. Етәксе булыр өсөн тәүҙә ябай хеҙмәткәр булып эшләргә кәрәк. Йайлап-йайлап тәжрибә туплап ҡына халыҡ менән эшләргә өйрәнергә мөмкин.

▸ **Уйҙарҙың матдиләшеүе бер кемгә лә сер түгел һәм шуға ла һәр саҡ оптимистик рухта булырға кәңәш ителә. Шуға милләттәштәребеҙҙе битарафлыҡтан тартып сығарыу өсөн тәүҙә уның уйҙарын үҙгәртергә кәрәктер, бәлки. Сөнки һуңғы ваҡытта эш булмауын колхоз-совхоз тарҡалыуҙа ғына күреп, үҙенә эшләүҙе түгел, ҡайҙалыр ел һуғарып йөрөүҙе хуп күргән ир-егеттәр күбәйҙе. Шундайҙарҙың фекерен нисек үҙгәртергә?**

**Р. Ғибәҙуллин:** Күп ваҡытты беҙ телевизор ҡарауға бүләбеҙ. Унда тәбиғи фильтр тигән нәмә юҡ, нимә тәҡдим итәләр - шуны ҡарайбыҙ, нисек күрһәтәләр - шулай ҡабул итәбеҙ, губка һымаҡ барыһын да һеңдереп барабыҙ. Мәғлүм булыуынса, кешегә кире мәғлүмәт тиҙерәк һәм күберәк һеңә. Аңы сүп-сар менән тулмаһын өсөн, кеше тәүҙә сиратта үҙенең мәҙәнилек кимәлен белергә тейеш. Минеңсә, телевизор ҡарағансы, китап уҡырға кәрәк: милләт тураһында, ил тураһында, дин тураһында. Үҙем бәләкәй саҡтан алып күп китаптар уҡыным, хәҙер ҙә уҡыйым. Кеше үҙенең рухына, диненә таянып йәшәһә, асылынан тайпылмаһа, шул саҡта ғына пессимистик көйләнештән сыға ала. Сөнки үҙеңдең рухи байлығыңа, йәшәгән төбәгеңдең энергияһына, үҙеңдең көсөңә таянырға кәрәк, һиңә берәү ҙә ситтән килтереп бирмәйәсәк. Үҙеңдең көсөңә ышаныр өсөн берәй абруйлы ғына кешенең саҡ ҡына ҡуҙғатып ебәреүе лә етә, бары тик теләк кенә булһын.

Ысынлап та, ана-бына бөтәбеҙ, тип йәшәгән ауылдар бар. Йәштәр ауылда ҡалмай. Ни өсөн ҡалмайҙар? Ниңә ололар ауылдың бөтөүенә юл ҡуя? Ниңә улар йәштәргә ауылда төпләнерлек итеп тәрбиә бирмәй? Ә бит беҙҙең халыҡтың борондан килгән тәрбиәһе шул: атай-әсәй баланы үҫтереүен үҫтергәс, бәхетле ҡартлыҡта йәшәргә тейеш. Ҡартайған көнөндә уны балалары ҡарарға, тәрбиәләргә тейеш. Шундай йола менән йәшәһәк, ауылдар ҙа бөтмәҫ, ир-егеттәребеҙ ҙә тырым-тырағай ил гиҙеп йөрөмәҫ.

**М. Арыҫланова:** Элекке ваҡыттарҙа шулай булды бит: колхоз-совхоз үҙәктәре булған ауылдар, мәҫәлән, беҙҙең Бала Сытырман ауылы халҡы, һәр ваҡыт шартына килтереп йәшәгән, уларға дәүләт иҫәбенә өй һалып биргәндәр, юлдар асфальтланған, газ, һыу үткәрелгән, эш урындары булған. Ә башҡа ауылдар барыбер ҙә үҙаллыраҡ йәшәгән, үҙҙәре төҙөгән, үҙҙәре тапҡан. Бына шул элек әҙергә бәҙер булып йәшәп өйрәнгән ауылдарҙа проблема артынан проблема тыуып тора инде ул. Битарафлыҡ уларҙа нығыраҡ күҙәтелә. Ир-егеттәр ҙә ил ҡыҙырып йөрөп ята, сөнки улар үҙ төйәгендә үҙҙәре эш табырҙарына ышанмай. Әгәр кешелә ышаныс, өмөт үлһә, бөтөн нәмә лә бөттө тигән һүҙ. Кемгәлер түгел, ә үҙ-үҙеңә ышаныс тураһында әйтәм. Бөгөн халыҡтың үҙ-үҙенә ышанысы бөтөүе һиҙелә, үҙенә ышанып йәшәгәндәр бик һирәк. Шул арҡала бөтөнләй битарафлыҡ һаҙлығына сумған ауылдар бар. Ауыл биләмәләрендәге беҙҙең эш - лидер булырҙай кешеләрҙе табып, уларҙы эшкә ҡушыу, уларға ярҙам итеү.

**Р. Ғибәҙуллин:** Беҙҙең Миндәк тә - шахтерҙар ҡасабаһы булды. Улар ҡалаға ҡарағанда ла яҡшыраҡ йәшәгәндәр. Бесәнен дә сабып биргәндәр, утынын да эшләгәндәр, күмерен дә килтергәндәр, өйҙәрен дә ремонтлағандар. Хәҙер бөтөн проблемалары ауыл биләмәһе хакимиәте ҡарамағына күсте. Ә ҡасаба халҡы һаман да әҙерҙе көтөп ултыра. Бөгөн ҡайҙандыр, кемдер килеп эшләп бирер йәки эш урыны асыр тип көтөп ултырырға ярамай. Ауыл йәшәһен тиһәң, үҙеңә тырышып эшләргә һәм ең һыҙғанып донъя көтөргә кәрәк. Бына шуны аңлатыуы ауырыраҡ шул ҡайһы бер ауылдар халҡына. Мәрзиә апай әйткәнсә, электән үҙаллы йәшәп өйрәнгән ауылдар менән ундай проблемалар юҡ.

▸ **"Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға теләп тә, баҙнат итмәгән башҡа райондарҙағы коллегаларығыҙға нимә әйтер инегеҙ?**

**Р. Ғибәҙуллин:** Ауылдарҙа төрлө халыҡ бар, уларҙың һәр береһенең күңеленә асҡыс табырға кәрәк. Төрлө ваҡыттар була, йә улар һине аңламай, йә һин кешеләрҙе аңламайһың. Сөнки һин дә кеше. Әммә бер-береңде аңлап ҡына дөйөм маҡсатҡа өлгәшергә мөмкин.

**М. Арыҫланова:** Халыҡҡа ышанысты юғалтмаҫҡа кәрәк. Уларға ысын йөҙөң менән әйләнеп, бер туған һымаҡ ҡабул итеп, ошо вазифаңда күпме эшләһәң дә, йөҙөп йөрөп, халыҡ өсөн эшләргә кәрәк. Ысынлап ярҙам итергә теләһәң, эскерһеҙ булыу зарур. Ҡасан да булһа, ниндәй ҙә булһа яңы эшкә тотонғанда ла барыбер ҙә беренсе аҙымды яһарға кәрәк. Шуға күрә, ваҡытты бушҡа һуҙғансы, бөгөн үк ошо бер аҙымды яһап ҡуйыу яҡшыраҡ. Хатта республика кимәлендә еңеү яулай алмағанда ла, әгәр ошо эштән ҡәнәғәтлек алаһың икән, был да үҙенә күрә бер еңеү ул. Үҙ-үҙеңде, баҙнатһыҙлығыңды еңеү.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә барышында, Ришат Мөнир улы Борис Полевойҙың "Ысын кеше тураһында повесть" тигән китабын ҡабат уҡып сығыуын әйтеп, ундағы бер сюжетты ҡыҫҡаса ғына һөйләп киткәйне: 23 йәшлек осоусы Алексей Маресьевтың аяҡтарын ҡырҡҡас, уның бөтөнләй йәшәүгә дәрте ҡалмай, өмөтһөҙлөккә бирелә, бер кем менән һөйләшмәй ҙә. Уларҙың палатаһында ятҡан бер комиссар һәр яугирҙың күңеленә асҡыс табып, йәшәүгә дәрт өҫтәй. Әммә бер нисек тә Маресьевҡа йоғонто яһай, ауыр уйҙарынан арындыра алмай. Шунда комиссар уға Беренсе донъя һуғышында летчик булып хеҙмәт иткән һәм һыңар аяҡлы булыуға ҡармаҫтан, самолет йөрөткән кеше тураһында гәзит мәҡәләһе бирә. Маресьев шуны уҡып, дәрт ала...**

**Кемдер аяҡһыҙ килеш тә самолет менән идара итергә үҙендә көс тапҡанда, беҙҙең бит, шөкөр, бар ағзаларыбыҙ ҙа һау, мөмкинлектәребеҙ күберәк. Бирешмәйек, әүҙем булайыҡ, айыҡ булайыҡ!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.**



*Беҙ көмөшкә ҡойорға яратыусыларҙың өйҙәренә йөрөйбөҙ. Абруйлы кешеләрҙең, ағай-апайҙарҙың үтемле һүҙе менән уларға йоғонто яһарға тырышабыҙ. 1 сентябрь, дини байрамдарҙа, ял көндәрендә магазиндарҙа һыра һатыуҙы тыйырға, тигән ҡарар ҡабул иттек. Араҡы беҙҙә бөтөнләй һатылмай. Магазин хужалары ла сикләүҙәргә ҡолаҡ һала, тыңлайҙар. Халыҡ бындай күренешкә күнегеп тә бөттө. Эскелек, әлбиттә, тиҙ генә юҡҡа сыҡмаясаҡ. Әммә тамсы тама-тама ташты тишкән кеүек, был хәрәкәт тә ҡасандыр үҙенең маҡсатына өлгәшәсәк. Ә инде был яуызлыҡҡа, еңеп булмай, тип, ҡул һелтәп ҡуйһаҡ, халыҡ битарафҡа әйләнәсәк.*

*✓ Атайым баҡый донъяға күсер алдынан: "Рәшит ағайығыҙҙың ҡәберен булһа ла табырға тырышығыҙ. Унның үле хәбәре килмәгәс, һаман да иҫәндер, тигән бәләкәй генә өмөтөм дә йәшәп килә ошоғаса", - тип әйткәйне".*






**Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көнөндә хәбәрһеҙ юғалған менәрләгән ҡорбандарҙың береһе - ҡыҙылармеец Һөйөндөков Заһитулла ағайымдың яҡты иҫтәлегенә бағышлайым.**

Инде туҡһанын ҡыуып барған фермер Ричард әфәндегә көтөлмәгәндә Рәсәйҙән, дөрөҫөрәге, Башҡортостандан хат килеп төштө. Журнал өҫтәлендә ятҡан күҙлеген алып кейҙе лә, ҡалтыранған ҡулдары менән әйләндергеләп ҡарағандан һуң, һаҡ ҡына хатты асты. Уңайлап диванға ултырып, күҙҙәренән бер аҙ алыҫайта биреп, латин хәрефтәре менән башҡортсалап яҙылған был хатты тулҡынланып уҡый башланы.

"Сәләм Башҡортостан илдәренән! Һаумы, беҙҙең ҡәҙерле күргән Рәшит ағайыбыҙ! Һинә Талха ағайыңдың улы Камил туғаның яҙа. Ҡырҡ беренсе йылда хәбәрһеҙ юғалғас, һинең тере түгеллегеңә шикләнмәй инек. Ләкин беҙҙең телевидениелағы (Аллаһ рәхмәте төшһөн үҙенә) "Көт мине" тигән тапшырыу программаһы ярҙамында һине табып, әле лә иҫән икәнлегеңде белдек һәм бик шатландыҡ. Атайыбыҙ, йәғни Талха ағайыңдың ун йыл элек донъя ҡуйыуы, ә Фәйзулла олатайҙың 1943 йылда уҡ һуғышта һәләк булып ҡалыуы һиңә мәғлүм түгелдер инде. Әсәйем (атай мәрхүм һөйләүе буйынса, һинең яратҡан Мәрхиә еңгәйең), ике йыл элек кенә гүр эйәһе булды. Атайым да, әсәйем дә һеҙ тыуып үҫкән Рысҡужа ауылында ерләнгән. Атайым баҡый донъяға күсер алдынан: "Рәшит ағайығыҙҙың ҡәберен булһа ла табырға тырышығыҙ. Унның үле хәбәре килмәгәс, һаман да иҫәндер, тигән бәләкәй генә өмөтөм дә йәшәп килә ошоғаса", - тип әйткәйне".

Бөйөк Ватан һуғышы башланырҙан бер йыл элек уҡ Ҡыҙыл Армия сафына алынып, өйҙән сығып киткән Рәшит бабайҙың күңеле һығылды. "Собханаллаһ", тип бер нисә мәртәбә ҡабатланы. Ҡартлыҡтан көүҙәгә бәләкәйләнеп ҡалған бабай, хәлһеҙләнеп, тағы ла кесерәйеп киткән һымаҡ булды. Диванда ултырған килеш ҡулындағы хатын күҙ йәштәренә мансыймансый, йәш балалар һымаҡ һулҡылдап-һулҡылдап иларға кереште. Бөгөнгөләй булып Талха ағаһы унның күҙ алдына килде.

- Рәшит ҡустым, тор, - тине егет булып үҫеп еткән Талха ағаһы ярым шыбырлап. - Атайҙы алып киталәр бит.

- Ҡайҙа? - тине йоҡонан арынып етмәгән Рәшит бер ни аңламай, күҙҙәрен ыуа-ыуа. Ишек төбөндә ҡоҙғолай йылтырап торған итекле, сөм күк фуражкалы бер хәрби унның атаһын көтөп тора ине.

- Ни өсөн? - тине атаһы әленән-әле үҙен ашыҡтырып торған хәрбигә ялбарыулы ҡарап. - Минең ни гәйебем бар? Аҙ ғына көтөп торорғоҙ, зинһар өсөн, исмаһам таңғы намаҙымды булһа ла уҡып сығайым...

- Тегендә барғас уҡырһың, халыҡ дошманы, - тип мыҫҡыллы йылмайҙы хәрби.

Халыҡ дошманы... Һуңғы ваҡытта кеше телендә бик таралып киткән был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен ун ике йәшлек Рәшит аңлай ине. Быйыл ғына тиҫтәләгән ауылдаштары шул "халыҡ дошманы" булыуҙа гәйепләнеп, ҡулға алынды. Хәҙер сират Рәшиттәрҙең аталарына ла килеп еткән икән. Ғүмер буйы мәҙрәсәлә балалар уҡытҡан, ауыл муллаһы вазифаһын башҡарған аталарының халыҡҡа ни зыяны тейҙе икән? Бәләкәй Рәшит бер ни ҙә аңламаны. Мыҡты кәүҙәле булып үҫеп еткән Талха ағаһы, атаһын яҡлашып, хәрбигә ниҙер әйтергә иткәйне, атаһы тыйҙы:

- Ярай, улым, закундан уҙып булмай. Сәүит закуны - ғәҙел ул. Тикшерерҙәр, аңлашырҙар. Әйҙәгеҙ, балалар, юл алдынан "Аятел Ҡөрси" уҡып алайыҡ.

Күҙҙәренә йәш тулған ике ағай-эне аталары менән бергә ултырып, доға ҡылды.

- Эй, балаҡайҙар, әсәйегеҙ ҙә бик иртә вафат булып ҡуйҙы шул. Рәшит улым, ағайыңды тыңлап йөрө. Фәйзулла ағайыҙға хат яҙып торорғоҙ. Ул әрмерәнән ҡайтҡас, бергә-бергә йәшәргә тырышығыҙ, - тине аталары көнгә янған бите буйлап тәгәрәп төшкән күҙ йәштәрен ҡулының һырты менән һөртөп.- Бәлки, Аллаһ насип иткән булһа, ул ҡайтҡансы мин өйҙә лә булырмын.

Минең туғыҙ йәҙ утыҙ өсөнсө йылдың май айҙары ине, буғай. Шул көндән алып малайҙар аталарын башҡаса күрмәне. Атаһы ҡулға алынғас, дүртенсе синыфта яҡшы ғына уҡып йөрөгән Рәшитте мәктәпкә индермәнәләр. "Халыҡ дошманының балаһына совет мәктәбендә урын юҡ", - тине уҡытыусы Йомағол ағай ҡырҡа ғына. Латин хәрефтәре менән бик матур итеп яҙырға, уҡырға өйрәнеп өлгөргән Рәшиттең артабан да белем алғыһы килә ине, ләкин унның мәктәп осоро шунын менән тамамланды. Талха ағаһына эйәреп, урман ҡырҡып ағыҙырға эшкә ялланды. Ләкин аталары ҡулға алынғанын белгәс тә урмансыларҙың хужаһы Хөрмәтулла уларҙы артабан эштә торорға ҡурҡты. "Һеҙҙең арҡала башымды төрмәлә серетергә иҫәбем юҡ, дүрт яғығыҙ ҡибла", - тине ул. Егеттәр үҙҙәренә аҙыҡлыҡ аҡса табыу ниәте менән ялан яҡҡа юл тотто. Асығып, көс-хәл менән йәмле Йәнәҙаҡ йылғаһы буйындағы тау араларында урынлашҡан Йәнбәк ауылына килеп еттеләр. Аслыҡ бар оялсанлыҡ тойғоларын һүрелтә, тигәндәре дөрөҫ икән. Ауыл осондағы иң тәүҙә күҙгә ташланған саман өйгә тура барып инергә тәүәккәлләне егеттәр. Өйөнөң тупһаһында тиренән ситек тегеп ултырған оло йәштәрҙәге ҡарт, көтөп алған ҡунаҡтарылай күреп, уларҙы йылмайып ҡаршы алды.

- Әйҙә, инегеҙ, - тине бабай иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡандан һуң. - Һейләмәй генә килә ятаһығыҙ. Мәрхиә ҡыҙым ашарға ғына саҡырып тора ине.

Мосафирҙарҙың кем булыуын һәм ниндәй эш менән йөрөүҙәрен дә һорашып тормаҫтан, ҡарындыҡ тәҙрәле балсыҡ стена яғындағы урындыҡҡа йәйелгән киндер ашъяулыҡ тирәләй ултырырға әйҙәне. Барлыҡ ризыҡтарын сығарып, ашъяулыҡҡа ҡуйғас та, йәш егеттәргә артабан күренеп ултырырға оялған ун биш-ун алты йәштәрҙәге ҡыҙ, битен яулыҡ осо менән ҡаплап, тышҡа сығып китте. Талха менән Рәшит, нисек кенә ас булыуҙарына ҡарамаҫтан, әҙәпле генә ашарға тотондо. Аш ваҡытында ҡарт уларҙан бер ни ҙә һорашманы. Кәбәге менән бешерелгән арыш икмәгенә ҡушып, балтырған бутҡаһын бик тәмләп ашағас, була ла инде шундай бәхетле кешеләр донъяла, тип уйланы Рәшит. Өйөндә туйғансы ашарлыҡ аҙыҡ булған кеше Ер йөҙөндә иң бәхетле булып тойола ине уға.

Илдә сәсәк ауырыуы күп кешеләрҙе ҡырған осорҙа биш улы, ҡатыны үлеп, яңғыҙ ҡыҙы - Мәрхиәһе менән икәүләшеп ғүмер иткән Мөхәммәтйән бабайҙың егеттәрҙә ситкә типкеһе килмәне. Улай ғына ла түгел, хатта уларҙы үҙ өйөндә ҡалырға өгөтләне.

- Икәү туйған аҙыҡ - өсәүгә, өсәү туйғаны дүртәүгә етер, - тигән Бәйғәмбәребеҙ. Ас булмабыҙ, иншаллаһ.

Тыныс тәбиғәтле, тәү ҡарауҙа уҡ үҙенә йәлеп итеп торған, ныҡлы таяныс һәм терәк булырҙай бабай малайҙарҙың да күңелдәренә хуш килде. Һис һүҙһеҙ ризалаштылар. Урта кәүҙәле, түңәрәк һаҡаллы Мөхәммәтйән бабай ифрат та диндар, етмәһә, бик оҫта һунарсы булып сыҡты. Башҡа кешеләр аслыҡтан интеккән саҡта ла, ҡарттың өйөндә кәм тигәндә бурһыҡ ите була. Ул егеттәрҙе һунарға алып йөрөй башланы. Рәшит тә бик оҫта итеп төлкө-бүрегә ҡапҡан һалырға өйрәнде. Хәҙер инде унның иң ҙур теләге - ҡарттың һыҙмаһынан атып ҡарау. Талха ағаһына һыҙманан атырға өйрәтһә лә, бабай әле Рәшиткә рөхсәт итмәй ине. Тәжрибәле һунарсы менән ҡырға йөрөүе бик күңелле. Мөхәммәтйән бабай юлда егеттәргә бәйеттәр көйләй-көйләй, башынан үткән ҡыҙыҡлы хәлдәрҙе, үҙе ҡатнашҡан Ярман һуғышы тураһында һөйләй.

Тик тормош гел шулай шыма ғына барманы. Мөхәммәтйән бабайҙың да хәле "ҡыл өҫтөндә" генә торған саҡты бик яҡшы хәтерләй Рәшит. Кемдер батрак малай тотоуҙа гәйепләп, унның өҫтөнән властарға ялыу яҙып биргән. Ҡарттың бәләгә тарыуында үҙҙәрен гәйепле һанаған егеттәр ауылдан китергә йыйына башланы. Тик бер эштә лә ҡабаланырға яратмаған Мөхәммәтйән ҡарт: "Бер ҡайҙа ла ашыҡмағыҙ, балаларым, үҙем яуап бирермен властарға. Мин бит әле биш йыл Герман бленендә йөрөп килгән кеше..." - тип егеттәрҙе туҡтатты. Атаһының шул һүҙҙәрен ишеткәс тә ҡара ҡашлы, муйыл күҙле Мәрхиәнең һылыу йөҙөндә шатлыҡ билдәһе күренгәне Рәшиттең иғтибарынан ситтә ҡалманы. Тимәк, Мәрхиә лә уларҙың китеүен теләмәй!

Был ваҡиға, ниндәйҙер мөғжиза менән, бик уңышлы тамамланды. Суд ҡартты аҡланы. Оҙаҡ йылдар Германияла пленда йөрөп, "донъя күреп" ҡайтҡан Мөхәммәтйән ҡарттың судта бик яҡшы итеп һөйләй белеүе үҙен ҡотҡарып ҡалды, тине кешеләр. Имен-аман ҡотолоп ҡайтҡас та, Мөхәммәтйән бабай өйөндә оҙаҡ итеп шөкөр намаҙы уҡыны. "Һәр нәмә өсөн Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итеп йөрөгөҙ, балаҡайҙар", - тип өйрәтте ул егеттәрҙе.

Ошо ваҡиғанан һуң Рәшит Талха ағаһы менән Мәрхиә апай араһында ғәҙәттән тыш йылы мөнәсәбәт булыуын һиҙә башланы. Талха менән ҡыҙының бер-береһенә булған ҡараштары кейек кеүек һиҙгер бабайҙың иғтибарынан да ситтә ҡалмағандыр, әлбиттә. Ике йылдан шулай йәшәгәндән һуң, уратып һөйләргә яратмаған Мөхәммәтйән ҡарт бер көндө Талхаға:

- Башлы-күҙле булырға ла ваҡыт еткән инде һиңә, улым. Мәрхиә ҡыҙым менән бер-берегеҙгә күҙ атып йөрөгәнегеҙҙе лә һиҙгеләйем. Әгәр ҙә теләһәң, ҡыҙымды һиңә кәләш итеп бирәм дә, әйҙә, кейәү булырһың да ҡуйырһың, - тине. Шулай тәҡдимде ишеткән Талха ағаһының ҡаушауынан һәм оялыуынан ҡыҙарынып киткәнен ситтән генә күҙәтеп ултырҙы ун бишенсе йәш менән барған Рәшит. Күп тә тормай, йәштәргә никах уҡыттылар. Тағы ла бер йылдан, землянка өй төҙөп, Талха ағаһы менән еңгәһенең айырым йәшәй башлауҙарына уларҙың тәүге улы донъяға килде. Камил тип исем бирҙеләр уға...

Камил. Рәшит бабай ҡулындағы хат авторының исемен йәнә бер тапҡыр ҡабатланы. Һикһәнде ҡыуып бара инде ул ошо мәлдә... Эй, үткән ғүмер! Тәки табып алған бит донъя йөҙөнән юғалған ағаһын.

...Бала саҡта ат тибеп һындырып, бер беләге бөгөлмәй ғәрипләнеп ҡалған Талха ағаһын Ҡыҙыл Армияға яраҡһыҙ, тип таптылар. Ыштанһыҙ йүгереп йөрөгән Камил, әлбиттә, Рәшит ағаһын хәтерләмәйҙер инде, сөнки, мең туғыҙ йөҙ ҡырҡынсы йылдың яҙында уға өс йәш кенә ине. Ағаһы, еңгәһе, Мөхәммәтйән ҡоҙаһы Рәшитте ауыл осона тиклем оҙатып ҡалдылар. Бер нисә йыл элек хәрби хеҙмәтен тултырып ҡайтҡан оло ағалары Фәйзулла алыҫта, урман төпкөлөндә ятҡан тыуған ауылдары Рысҡужала йәшәү сәбәпле, унның менән хушлашып та өлгөрмәне. "Ярар, өс йылдан күрешербеҙ әле, Алла бойорһа", тип, Рәшит эстән генә үҙен-үҙе йыуатты. Брест ҡалаһының көнбайыш ситендә урынлашҡан гарнизонда хеҙмәт юлын башланы. Бер йыл буйы ағаларына тап бына ошондай латин хәрефтәре менән хаттар яҙып торҙо. Һуңғы хатын 1941 йылдың 23 июнендә яҙғайны. Сиктәге көсөргәнешле хәлдәрҙе, немец фашистарының бөтөн Европаны баҫып алып, илгә хәүеф һалып торғанын белһә лә, туғандарына был хаҡта бер ни ҙә яҙманы. "Аллаһы Тәғәлә яҙған булһа, яҡынан ике йылдан күрешербеҙ..." - тигән юлдар бар ине ул хатында.

* * *

Таң беленә башлағанда яҡтыһына көсле гөрһөлдәү, шартлау тауыштарына уянып китте Рәшит. Улар торған казарманың бер яҡ тәҙрәләре селпәрәмә килгән ине. "Рота, в ружье!" тигән команда яңғыраны. Рота буйынса дежурныйҙың быныдай командаһын ишетеп өйрәнеп бөткән һалдаттар, ғәҙәттәгесә, ашыҡ-бошоҡ кейенә башланы. Унның башынан йәшен тиҙлеге менән "Һуғыш!" тигән уй үтте. Һәр бер һалдатҡа бишәр генә патрон менән винтовкаларын ашыҡ-бошоҡ тараттылар ҙа, әле тыныс саҡтарҙағы учениелар ваҡытында алдан әҙерләнеп ҡуйылған позицияларына йүгерешеп барып яттылар. Бөтә ротаға бер генә "Максим" пулеметы.

Бер ни тиклем ваҡыттан урамдар бушап ҡалғандай булды. Самолеттар тыуышы ла, шартлауҙар ҙа тынды. "Бәлки, был сираттағы ҙур учениеларҙың береһе башланыуылыр?" тигән өмөтөн һаман өҙмәне Рәшит. Тик ни өсөн шул хәтлем емертеүҙәр?.. Уны ғына түгел, башҡа һалдаттарҙы ла борсоған ошо һорауҙарға яуап биргәндәй, күпте күргән старшина Егоров: "Ребята, это - война..." - тине. Унның һүҙҙәрен раҫлағандай, күп тә үтмәй, ҡала ситендәге ваҡ йорттарҙы шырпы ҡабындай тапай-тапай килгән эре танкылар күренде.

**(Дауамы бар).**

✓ *Йышыраҡ сит ил әҫәрҙәренә мөрәжәғәт итергә күнегеп киттек, уның урынына иле, халҡы, Уралы, теле өсөн йәнен аямай көрәшкән батырҙар тураһында заманса спектаклдәр ҡуйылһа, театрҙарҙа тамаша тулы булыр ине.*



ИЖАДХАНА

**Билдәле актер, РСФСР-ҙың халыҡ артисы Валентин Гафт замандашы, СССР-ҙың халыҡ артисы Армен Джигарханянға арнап яҙған эпиграммаһында: "Ер йөҙөндә әрмәндәр Джигарханян төшкән фильмдарға ҡарағанда күпкә әҙерәк", - ти. Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры артисы Рауил Ғәлин тураһында ла, шаяртып, шулай тип әйтергә мөмкиндер, моғайын. Сөнки ул уйнаған спектаклдәрҙә лә тиҙ генә ултырып һанап бөтөрлөк түгел: ҡырҡ йылдан ашыу театр артисы булып эшләү дәүеректә Рауил Әхтәрйән улы башҡорт милләтен характерлаған бөтөн образдарҙы ла һынландырып өлгөргән төҫлө. Күптән түгел 65 йәшлек юбилейын билдәләгән актер менән ярты сәғәт эсендә оҙон ижад юлы дауамында тыуған уй-фекерҙәрен барланыҡ.**

# ТАМАШАСЫҢДЫ...

## буфет тураһында онотторорлоҡ итеп уйна



Мин Инйәр буйы башҡорто, Архангел районы Ҡыҙылъяр ауылында тыуғанмын. Атайым сығышы буйынса Сысҡан ауылынан, ә әсәйем - Йомран ауылы ҡыҙы. Шуға күрә, ҡайһы саҡта үҙем тураһында "Мин берәй "Алйырҙан" ауылынан булырға тейешмендер", тип шаяртып та алам. Мәктәп йылдарында уҡ сәхнәгә ынтылышым бар ине, 1970 йылда әрме хеҙмәтен үтәп ҡайтыуыма, Өфө дәүләт сәнғәт институтын асып ҡуйғандар, имтихандарҙы уңышлы тапшырып, шунда уҡырға индем. Аллаға шөкөр, актер булып эшләргә лә, үҙем белгәндәрҙе йәштәргә өйрәтергә лә тура килде - ун йыл студенттарға актерлыҡ оҫталығы дәрестәре бирҙем. Уҡыуҙы тамамлағандан һуң, Салауат башҡорт дәүләт драма театрында 17 йыл эшләнем. Шунда эшләгәндә үк Башҡортостан ҡалалары араһында ҙурлығы буйынса икенсе урында торған Стәрлетамаҡта башҡорт театры булмауына көйөнөп, уйланып йөрөй торғас, коллегам, режиссер Гөлдәр Ильясова менән телəктәр берегеп, бөтөн донъябыҙҙы ташлап, Стәрлетамаҡта театр асып ебәрҙек. Әлбиттә, Стәрлетамаҡ театры унан күп йылдар элек булған, ләкин республиканың баш ҡалаһы статусы Өфөгә бирелгәс, театр ҙа шунда күсерелә. Театр - ул кеше кеүек тере организм. Кеше лә ҡайһы берҙә сөскөрөп, йүткереп, сырхаулап ала, кире терелеп китеп, эшләп китә лә, йоҡо баҫып, тағы ла һүлпәнләнә. Театрҙың да төрлө хәле була, әҙерәк түбәнәйгән ваҡыттары, шау-гөр килеп эшләгән осорон да күрҙек. Кемдәрҙер килә, кемдәрҙер китә - кеше ағзаларына операция яһауҙы нисек ауыр кисерһә, театр ҙа шундай уҡ ваҡиғалар менән йәшәй.

Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театрында йәш актерҙар күп эшләй, шуға күрә беҙ күңелле йәшәйбеҙ. Әйткәндәй, эшен "Күңелле йәшәйбеҙ" тигән көләмәстәр циклынан башлаған киностудиябыҙ хәҙер тулы метражлы фильмдар ҙа төшөрә. Иң башта "Сәксәк", һуңынан "Бәхет ҡошом" фильмы төшөрөлдө, быйыл "Сиреүсе" күп серияле кино сығарҙыҡ. Фильмдың атамаһы булған сиреүсе һүҙе - һалдат, яҡлаусы, сиреүҙең бер яугиры тигәндә аңлата. Яңыраҡ ҡына "Башҡортостан" телестудияһында режиссер Таңсулпан Бураҡаеваның "Ике егет" тип аталған фильмында төп ролдәрҙең береһен башҡарырға тура килде, ул май айында прокатҡа сығырға тейеш. Тамашасылар, бәлки, сәхнә һәм кино актерҙары араһындағы айырманы артыҡ аңлап та бөтмәйҙер. Барыбер икеһе лә бер үк - бүтән кешеләрҙе, башҡа яҙмыштарҙы уйнай, тип уйлауы бар. Әммә был улай ябай ғына мәсьәлә түгел, драма һәм кино актеры араһында айырма бик ҙур, был хәҡиҡәткә төүге тапҡыр киноға төшкәндә үк төшөнөргә тура килде. Өфө дәүләт сәнғәт институтында актер һөнәрен үҙләштереүселәрҙең дипломына "Драма театры һәм кино артисы" тип яҙып сығарһалар ҙа, уҡығанда драма артисын әҙерләүгә баҫым күберәк яһала. Беҙҙә сәхнә үҙендә нисек тоторға, артыҡ рәткә тиклем тауышыңды нисек еткерергә, һүҙҙәрендә, һәр бер өнөңдә ишетерә һөйләшергә өйрәтәләр. Спектакль барышында һин зал тулы тамашасыңың мәнфәғәтен ҡайғыртып, хатта өҫтәл артында тыныс ҡына сәй эсеп ултырған осраҡта ла ҡысҡырып өндәшергә тейешһең. Ә киноға төшкәндә, киреһенсә, ҡамгесә генә аралашырға һәм үҙеңдең уйҙарыңды, образыңды асып бирергә тырышаһың. Өҫтәүенә, камера алдында һөйләүе лә ҡайһы берәүҙәр өсөн ҡыйынлыҡ тыуҙыра, кеше баҙап ҡала. Сәхнәлә уйнағанда 300, 500, 1000 кешенең ауыҙын астырып, үҙенә ҡаратып ултыртып ҡуйғанда ла, фильм төшөргәндә оператор һәм режиссерға ярап булмай, дубль артынан дубль эшләп, 15-20 тапҡыр яңынан төшөргә тура килә. Бәлки, "Башҡортостан" киностудияһы аяҡҡа баҫып, матурлап эшләп китһә, ысын кино артистары тәрбиәләүгә лә иғтибар артыр, сәнғәт училищеларында, академияла айырым дәрестәр үткәрелә башлар, тигән өмөт бар.

Минән йыш ҡына башҡарған ролдәремдең ҡайһыһы үҙемә ныҡыраҡ оҡшауы, яратып уйнаған спектаклдәремде атауҙы һорайҙар. Актер өсөн әлбиттә, бөтөн ролдәр ҙә яҡын, ҡәҙерле ул. Шулай ҙа, әгәр күңеләнә яҡҡан әҫәр, характеры менән оҡшаш образды башҡарһаң, режиссер менән эшләүе енел булһа - был спектаклдә айырым бер кинәнеү тойғоһо кисереп уйнайһың. Ҡырҡ йылдан ашыу театрҙа эшләү дәүерендә миңә төрлө ролдәрҙе башҡарырға тура килде, күңелемә ятмағандары, этләнеп эшләгәндәре лә булды. Комедияла уйнауы енел кеүек тойолһа ла, киреһенсә, шуҡ кешене трагик образға ҡарағанда һынландырыуы күпкә ауыр ҡайһы саҡта. Нисек кенә булмаһын, Флорид Бүләковтың "Мөхәббәт ҡарағы" спектаклендә Хәйбүш ҡартты нисек яратмай уйнарға мөмкин! Ролгә ҡарата булған мөнәсәбәтен тамашасыға һиҙелә, әҙ генә ихласһыҙлыҡ күрһәтһәң, кеше лә илтифатһыҙ ғына ҡабул итә. Хәмит Иргәлиндең "Инә бүре ҡарғышы" трагедияһында Әбделмәлик Солтанғолов ролен башҡарыуы еңел түгел, сөнки халыҡ ирке тип көрәшкән батыр образын һынландырыу өсөн күп эшләргә кәрәк. Беҙҙең хеҙмәткә баһаны тамашасы ҡуя, баһаларын ишетеп торам. Йыш ҡына агроном, ябай эшселәрҙе уйнауымды оҡшаталар, булмышына тап килгән образдар, тиҙәр. Бер ваҡыт "Кисер мине әсәй, ғәфү ит!" спектаклендә мин бер шабашникты уйнағанмын, бер тамашасы: "Һин үҙең шулайтып йөрөнөнмө әллә?" - тине. Артист кеше бер һөнәрҙе үҙләштереп кенә туҡтап ҡала алмай, һәр һөнәрҙе саҡ ҡына булһа ла белергә тейеш. Шуға күрә, шағир булмаһам да, шиғыр яҙмай күңелем бушамай минен, тейем. Балалар өсөн "Буя уйлап, ҡуйма бутап", "Дүрткүҙ" тигән ике китабым донъя күрҙе, тәүгеһендә шиғырҙар бирелгән, шуның буйынса ниндәй һүрәт икәнен ҡарап буярға кәрәк. Кескәйҙәр өсөн рус теләндә баҫылған бындай китапсыҡтар күп, уларҙың әкиәт батырҙарын һынландырғандары ла бихисап, ә үҙебеҙҙең башҡорт балаларына тәғәйенләнгән бындай сағыу китаптар юҡ кимәлендә. Ошоно иҫәптә тотоп, тырыштырғайным да, хәҙер ул китабым ҡулланыуҙа бармы-юҡмы, белмәйем. "Дүрткүҙ"ҙә балалар өсөн хикәйәләр, шиғырҙар, пьесалар тупланған.

Кешегә тыуғас та төрлө мөмкинлектәр бирелә, ул ниндәй һәләттәрен үҫтерергә, ҡайһы юлдан китергә теләй, үҙе һайлай. Шул ваҡытта уға кәңәш биргән, яҡшыға юл күрһәткән берәү кәрәк. Актер булыу өсөн һәләтең булырға тейеш, әммә артабан уны камиллаштырыу үҙеңдән генә тора. Үҙ миҫалымдан сығып әйтәм, спортсы кеүек, көн дә үҙ өҫтөңдә эшләмәһәң, шөғөлләнмәһәң, талант юғала. Салауат башҡорт дәүләт драма театрында бер аҙ эшләгәндән һуң, ике йылға киренән армияға замполит итеп алдылар, хәрби званием бар ине. Ҡайтҡас, сәхнәгә сығырға ҡаушап, ҡурҡып ҡалаһың. Күберәк эшләргә, сәхнәгә йышыраҡ сығырға, уйнарға тырышырға кәрәк. Артисҡа эш булмаһа, ролдәр бирмәһәләр һүрелә, күңеле төшә, ҡыйыуһыҙлана һәм үҙ-үҙенә ышанысын юғалта. Әлбиттә, актерҙың дәртләнеп эшләүе, профессиональ яҡтан үҫешеүендә режиссерҙың да роле ҙур. Ул береһен дә "яратҡан" һәм "яратмаған" ға айырып ҡарарға, һәр ваҡыт тик берәүҙәр менән генә эшләргә тейеш түгел, был театрҙағы иң алама күренеш.

Стәрлетамаҡ ҙур ҡала, бында 280 мең кеше йәшәй. Спектаклдәргә һәр ваҡыт теләп киләләр, бер йылға ремонтҡа ябылып торғанда ғына халыҡ һүрелеп, залдар ярым бушап киткәйне, хәҙер киренән театр донъяһына ылыҡтырып барабыҙ. Үткән йыл "Мәҙәниәт йылы" тип нарыҡланғас та ҙур үҙгәрештәр көткәйнек, ысынлап та, театрыбыҙ тормошона байтаҡ ҡына яңылыҡтар индерелде. Стәрлетамаҡ ҡалаһының театр, филармония, бейеү ансамбле, оркестры бергә ҡушылды, коллектив составында үҙгәрештәр булды. Быйыл, Әҙәбиәт йылында, яңы пьесалар яҙылыр, улар буйынса яңы спектаклдәр ҡуйылыр, тип өмөтләнәм. Бөгөн минең тик бер генә теләгем бар - Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры бер ҡасан да һүнмәһен, киләсәктә бөтә ауырлыҡтар уны урап үтһен, ябылып ҡуймаһын инде. Ул бит ошо ҙур ҡалала башҡорт мәҙәниәтен, телен, милли үҙаңыбыҙҙы һаҡлап торған үҙәк. Стәрлетамаҡта яҙыусылар, драматургтар бик күп, башҡорт батырҙарын, рухын, көнкүрешен, әҙәбен сағылдырған пьесалар буйынса спектаклдәр йышыраҡ ҡуйылһа ине. Әлбиттә, драматург - ул әҙерҗәле исем, ҙур яуаплылыҡ талап иткән һөнәр. Ысын драматург үҙенең фекерен, донъяға ҡарашын ғына сағылдырмай, ул режиссерҙың ниәтен, йүнәлешен дә күҙ уңында тоторға тейеш. Шуға күрә, өйҙә генә ултырып, театрға бер тапҡыр ҙа барып урамайынса, пьесалар яҙып ятыусы драматург бер ҡасан да юғары кимәлгә күтәрелә алмай. Бәлки, комедия жанрында ижад итеүе еңелерәктер, теҙеп, теләһә ниндәй көлкө хәбәрҙәр яҙып сығырға ла була. Ләкин ундай сценарийҙың актер өсөн ҡыҙығы табылмай, беҙ халыҡты бармаҡ күрһәтеп, күҙ ҡыҫып көлдөрөүгә ҡарағанда, нескә юмор, сатира аша күңелен күтәрергә яратабыҙ. Кеше һәр ваҡыт һыҡтап ултыра алмай, ләкин көлгәндә лә үҙенә: "Нимә өсөн мин былай көләм? Туҡта, был нимәне аңлатты әле?" - тигән һорауҙы бирергә тейеш. Юморы кендегенән аҫта, фекере иҙәндә булмаһын ине. Әйтергә кәрәк, башҡорт менталитетын, характерын, тарихын сағылдырған спектаклдәр ауыр ҡуйыла, ауыр ҡарала. Әммә башҡорт батырҙарын, халыҡ яҙмышын күрһәтеү ҙә кәрәк, сөнки был йәш быуында рух тәрбиәләй, ололарҙы уйланырға мәжбүр итә.

Мине тағы ла драма әҫәрҙәрен тәржемә итеү мәсьәләһе борсой. Беҙгә профессиональ тәржемәселәр етмәй, башҡортса һүҙ һөйләй беләм, тип, телдең грамматикаһын, бөтә нескәлектәрен өйрәнмәй тороп, аҡса эшләү өсөн генә тәржемәгә тотоноусылар бар. Ләкин "ж" урынына "с", "ҫ" урынына "ҫ" ҡуйып ҡына, ул әле башҡорт теле була алмай. Тәржемәгә ошондай яуапһыҙ мөнәсәбәтте күреп, хатта ҡайһы ваҡытта Нәжиб Асанбаев кеүек тәржемәселәр юҡтыр ул хәҙер, тигән фекергә лә килеп ҡуям.

Драматург заман менән бергә атларға тырышһа ла, хатта уның әҫәрендә сағылдырылған проблема актуаллеген юғалтмаған осраҡта ла, ваҡыт үтеү менән артта ҡала. Ниндәй генә классик әҫәр булмаһын, уға саҡ ҡына төҙәтмә индерергә, яңыртырға тура килә. Әйтәйек, Шекспирҙы ла үҙгәрткәндәр, Мостай Кәримдең пьесаларына ла хәҙер яңыса ҡараш өҫтәйҙәр. Беҙ йышыраҡ сит ил драматургтарының әҫәрҙәренә мөрәжәғәт итергә күнегеп киттек, уның урынына иле, халҡы, Уралы, теле өсөн йәнен аямай көрәшкән батырҙар тураһында заманса спектаклдәр ҡуйылһа, театрҙарҙа тамаша залдары шығырым тулы булыр ине. Ундай пьесалар бар, әммә уларҙы сәхнәләштерергә батырсылыҡ итеүселәр һирәк. Башҡорт менталитетын, йәшәйешен белмәгәс, фольклорын һәм тарихын уҡымағас, был әҫәрҙәрҙән ҡурҡалар. Еңел-елпе әҫәрҙәрҙе сәхнәләштереп, актерҙы күберәк йырлатып-бейетеп, ҡыландырып рәхәт ҡотолалар. Ә актерҙың тәғәйенләнеше - ул иленә, халҡына, тыуған төйәгенә ҡарата булған һөйөүен бөтөн кешеләргә аңғартыу, уларҙа ла ошо хисте, рухты тәрбиәләү. Быны шул турала ла онотторға ярамай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Билдәле яҙыусы, һүҙ оҫтаһы Аркадий Давидович: "Тамашасыны буфет тураһында онотторға мәжбүр иткән актер - бөйөк", - ти. Ә бөгөнгө замана тамашасыһын ниндәй тамаша менән тамаҡ туйҙырыу тураһында онотторып була һуң? Был һорауға үҙе шығырым тулы тамаша залын әсир итә белгән әңгәмәсебеҙ яуап бирҙе лә кеүек. Тик үҙ халҡы, иле өсөн янып йәшәгән, шул борсолоуҙарын сәхнә аша милләттәштәренә еткерә алған актер ғына шул кимәлгә күтәрелә ала шул.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Ауыл ерендә йәшәүселәр медицина тикшереүе үтеүгә битараф ҡала һәм был махсус медицина ярҙамы алыу мөмкинлеге булмауға ла бәйле, шуға күрә, ауыл ерҙәрендә йәшәүсе ир-ат урологик сирҙәр буйынса тейешле ярҙам ала алмай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МИКРОБТАР... ҡайҙа үрсей?

■ Хәтер юғалыу - ҡартайыу процесының тәбиғи күренеше, ул Альцгеймер ауырыуы билдәһе булмауы ла ихтимал. Әммә хәтер юғалтыу ирҙәрҙә күпкә иртәрәк - 40 йәштән һуң башлана. Бер төркөм ғалимдар 30 йәштән 95 йәшкә тиклемге 1246 кешенең баш мейеһе тәҙөлөшөн һәм әүҙемлеген тикшергән. 30 йәштән 90 йәшкә тиклем хәтерҙең дөйөм түбәнәйеүе асыҡланған. Баш мейеһенең хәтирәләрҙе һаҡлай торған өлөшө - гиппокамптың кәмеүе лә күҙәтелгән. Уның бәләкәсәйеүе баш мейеһе эшмәкәрлеген дә насарайта. Ирҙәр мейеһенең гиппакампы күләме ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына ҡарағанда күпкә кәмерәк булыуын да раҫлаған ғалимдар. Әммә быны ң сәбәбе билдәле түгел, бәлки, ҡатын-ҡыҙҙарҙа булған эстроген гормоны нейрондарҙы зарарланыуҙан һаҡлайҙыр, тип фаразлай белгестәр.

■ Британия парламентының юғары парламенты тәмәке ҡаптарында брендтарҙы күрһәтеүҙе тыйған ҡарар ҡабул итте. Яңы ҡарар 2016 йылдың майында үҙ көсөнә инәсәк. Хәҙер тәмәке ҡара төҫтәге стандарт ҡаптарға төрөп һатыласаҡ, ҡапҡа бары тик тәмәкенең кеше организмына килтергән зыяны тураһындағы иҫкәртеү генә баҫыласаҡ. Быны белгәндән һуң тәмәке етештереүселәр судҡа мөрәжәғәт итәсәктәрен белдерҙе. Сөнки был тыйыу уларҙың интеллектуаль милеккә булған хоҡуғын боҙа. Улар шулай был сара контрабанда сауҙаһына юл асасаҡ, тип билдәләй. 2012 йылда ошондай уҡ тыйыу Австралияла индерелгәйне, быйыл март айында был өлгөгә Ирландия эйәрҙе.

■ Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда күпкә хислерәк, тип белдерә Вашингтон университеты менән Джорж Мейсон университеты белгестәре. Һәр хәлдә, улар йышыраҡ беренсе ҡараштан ғашиҡ була, тип раҫлай улар. Тәрлө илдәрҙә йәшәгән 70 мең кешенән һорау алғандан һуң, улар тап ир-егеттәрҙең көтөлмәгән ярһыулыҡҡа һәләтле икәне асыҡланған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы ир-аттарҙың 48 проценты тәү ҡараштан ғашиҡ булған, ҡатын-ҡыҙҙар араһында был6дайҙар иҫәбе 28 процент ҡына. Ир-егеттәр яратҡан кешеһенә йышыраҡ хыянат та итә, ситкә йөрөүселәр һаны улар араһында 33 процент, ҡатын-ҡыҙҙарҙа - 19.

■ Колорадо университеты ғалимдары әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡулында микроорганизмдар үҫеше өсөн шарттар ҡулайлыраҡ. Көн һайын эштә лә, өйҙә лә саң йыйылған әйберҙәр менән ике енес тә йыш ҡуллана, әммә микробтар ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡулдарына күберәк йыйыла, сөнки ир-егеттәрҙең тиреһенең әселеге күпкә юғарыраҡ. Гүзәл заттарҙың косметика ҡулланыуы һәм гормональ фоны ла бында роль уйнай. Косметика микробтар үҫешенә булышлыҡ ҡына итә. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡулдарҙы йыуыу ундағы микробтар һанына тәьҫир итмәй икән. Кешенең устарында даими рәүештә 150 бактерия йәшәй, уларҙың 17 проценты ғына ике ҡулда ла осрай, йәғни, улар бер ерҙән икенсе ергә күсеп йөрөмәй.

■ Цюрихтың юғары техник мәктәбе ғалимдары кешенең тукланыуы менән уның холҡоноң ҡайһы бер сифаттары бәйле булыуын асыҡлаған. Артыҡ тәртип яратмаған, төрлө хәл-вәҡиғаға көйөп барған кешеләр артығын ашарға ярата икән. Кем донъяға, яңы тәьҫораттарға асыҡ, изге күңелле, улар юғары калориялы ризыҡтарҙы һирәгерәк ҡуллана. Зарланырға яратыусылар кире тойғоларҙы ашап баҫа, аралашыусан кешеләр йыш ҡына ҙур компанияла булғанлыҡтан, улар ҙа күберәк ашай.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**"Ир-ат - үлеп бөтөп барған милләт" тигән кеүегерәк хәҡиҡәт ҡатыш шаярыу бер нигеҙһеҙ тыумағандыр. Билдәле хирург Венер Сәхәүетдинов БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты сағында ир-ат сәләмәтлегенә ҡағылышлы закон ҡабул итеүгә өлгәшеп, был өлкәлә ҙур эш башҡарғайны. Бөгөн ошо йүнәлештә нимәләр эшләнә, ғөмүмән, ир-ат һаулығы буйынса нимәләр мәғлүм һәм көслө зат үҙе ошо хаҡта ниҙәр белергә тейеш? Һорауҙарға яуапты Республика перинаталь үҙәгенең хирург-урологы, медицина фәндәре кандидаты Илдар ФӘТТӘХОВ менән бергәләп эҙләйәсәкбеҙ.**

# ТҮЛҺЕҘ ИРҘӘР КҮБӘЙӘ...



## Яҡлауға мохтаж көслө зат...

Бөгөн республика халҡының 47 проценты самаһын ир-егет тәшкил итә. Кандидатлыҡ диссертацияһын әҙерләгәндә республиканың ауыл һәм ҡала ерлегендә йәшәүсе ир-егеттәрҙең һаулыҡ торошон сағыштырып тикшереү һөҙөмтәһендә шундай картина тыуҙы: уларҙың һаулығы, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына ҡарағанда, бик күп күрһәткестәр буйынса насарыраҡ икән дә баһа! Хатта көслө зат араһында дөйөм үлем күрһәткесе 1,3 тапҡырға артығыраҡ, ә эшкә яраҡлы йәштә ул 4-5 тапҡырға күберәк. Ғүмер оҙайлығы ла 10-12 йылға ҡыҫҡараҡ һәм айырым социаль әһәмиәтле ауырыуҙар кимәле лә юғарыраҡ. Был күренештәрҙең төп сәбәбе - ир-аттың хәүефле һәм ауыр хеҙмәткә йышыраҡ йәлеп ителеүе, стресҡа, насар ғәҙәттәргә йышыраҡ бирелеүе, медицина тикшереүе үтергә бик атлығып тормауы, үҙ сәләмәтлектәренә битарафлығы, бик йыш иҡтисади һәм социаль хәлдәренең тотороҡло булмауы. Шул уҡ ваҡытта илдең тулайым милли продукты тап көслө, эшкә яраҡлы ир-аттың көсө менән булдырыла. Уларҙың физик һәм әхлаҡи сәләмәтлегенә йәмғиәттең генә түгел, ғаиләнең дә үҫеше бәйле. Бында репродуктив ағзаларының төрлө ауырыуҙарға дусар булыуы арҡаһында фертиль йәштәге ирҙәрҙең сәләмәтлегә түбәнәйеүе лә ҙур проблемаға әүерелә барыуын билдәләп китмәй булмай.

## Иҫәп юҡ, проблема ла юҡ!

Рәсми статистика буйынса, ир-ат һаулығын тикшереү мөмкин түгел, сөнки ундай мәғлүмәт бер ҡайҙа ла юҡ. Берҙән-бер сығанаҡ - ир-егеттәрҙең теркәлгән ауырыуҙары. 2002 йыл менән сағыштырғанда 2011 йылда республика буйынса ир-егеттәр ауырыуҙары - 13, беренсе тапҡыр асыҡланған сирҙәр 14 процентҡа артҡан. Ошо арауыҡты ҡарағанда, барлыҡҡа килгән яңы шештәр 2,6 тапҡырға, психик һәм күңел торошондағы тайпылыштар - 9, нервылар системаһы ауырыуҙары 40 процентҡа үҫешкән. Бары тик эндокрин системаһы (32 процент) һәм аш һеңдереү ағзалары ауырыуҙары (37 процент) ғына кәмегән.

Андрологик патология структураһында беренсе урында енес биҙҙәре трофикаһының (туҡыманың, ағзаның эшмәкәрлеге йәки структураһы һаҡланыуын тәьмин иткән күҙәнәк туҡланыуының процестар берлеге) боҙолоуы, икенсе урында - енес ағзаһы япмаһының патологияһы, өсөнсө урында ҡорһаҡтың енсә ярыһы үҫентеһенең ауырыуы һөҙөмтәһендә ҡыуыҡлы ағзаларҙың, үт, һейҙек юлдарының, тамырҙарының бөрөшөүе йәки бөтөшә башлауы тора. Һөҙөмтәлә сат, сат-күкәй тоҡсаһы бүсере, орлоҡ канатигы кистаһы, күкәй тиресәһенә һары һыу йыйылыу ауырыуы барлыҡҡа килеүе ихтимал. Уларҙы профилактик медицина тикшереүе үткәргән ваҡытта ла асыҡларға мөмкин.

## Йәштәр китә...

2002-2011 йылдарҙа республиканың ир-егеттәре араһында дөйөм үлем кимәле 5,6 процентҡа, йәғни 1000 кеше иҫәбенә 16,2 проценттан 15,3 процентҡаса кәмегән. Ауылдағы ир-ат араһында был һан ҡаланыҡыларға ҡарағанда 1,5 тапҡырға күберәк.

2011 йылға, 2002 йыл менән сағыштырғанда, ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙарынан, ҡан баҫымынан, киҫкен миокард инфарктынан вафат булыусыларҙың кәмеүе күҙәтелә. Ирҙәрҙең икенсе урында торған үлем сәбәптәре - йәрәхәттәр, ағыуланыуҙар. Ун йыл эсендә был күрһәткестәр 23 процентҡа кәмегән. 2011 йылда йәрәхәттәрҙән үлеү структураһында 28,8 проценты үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙар, 14 проценты - юл-транспорт фажиғәләре, 9 проценты - билдәһеҙ ниәттән сығып йәрәхәтләнеүҙәр, 7 проценты үлтереүҙәр ала. Был һандарҙы үҫмерҙәргә күсерһәк, 2010 йылда уларҙың 40 проценты үҙ-үҙенә ҡул һалған, 16,7 проценты юл-транспорт фажиғәһендә һәләк булған. 15 йәшлектәр араһында үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар 42,9 процент алып тора. 21,4 процент - юл-транспорт ваҡиғаларына тура килһә, 14,3 проценты - яман шештән үлеүселәр. 17 йәшлектәр араһында үҙ ғүмерҙәрен ҡыйыусылар һаны күберәк - 45,2 процент. Шул уҡ ваҡытта үҫмерҙәрҙең төрлө ауырыуҙар һөҙөмтәһендә үлеүенең тиҫтә йыл эсендә 18,1 процентҡа кәмеүе күҙәтелә.

Яман шештән үлеүселәр һаны ла кәмей. Булған осраҡта уларҙың 39 проценты - аш эшкәртеү ағзаларына, 30 проценты - тын юлдарына, ҡалғандары ир-аттың енси һәм бәүел ағзалары ауырыуҙарына тура килә. Ирен (19 процент), йыуан эсәк (5 процент), тура эсәк (6 процент), ашҡаҙан аҫты биҙе (17 процент), простата биҙе (5,4 процент), бөйөр (28,6 процент) яман шеше буйынса үҫеш күҙәтелә. Һуңғы йылдарҙа эшкә һәләтле ир-аттың аш эшкәртеү ағзалары, ҡан әйләнеше системаһы, тын юлдары ауырыуҙарынан үлеү осраҡтары арта.

## Сирен йәшергән...

Ауыл халҡы йәшәгән 41 муниципаль район һәм, Өфө ҡалаһын да индереп, 7 ҡала округы буйынса ир-аттың репродуктив системаһы ауырыуҙарын асыҡлау маҡсатында үткәрелгән тикшереүҙәр ике халыҡ иҫәбен алыу араһында республикала простата биҙе ауырыуҙарын беренсел асыҡлауҙың - 35, дөйөм ауырыуҙарҙың 27 проценты артыуын күрһәтте. Түлһеҙлек диагнозы 2006-2008 йылдарҙа күп теркәлгән. Дөйөм алғанда, йыл һайын 133-140 ир-атҡа беренсел түлһеҙлек диагнозы ҡуйыла. Мәғлүм булыуынса, ауырыу кимәле төрлө сәбәптәргә бәйле. Ауыл ерендә йәшәүселәр медицина тикшереүе үтеүгә битараф ҡала һәм был махсус медицина ярҙамы алыу мөмкинлеге булмауға ла бәйле, шуға күрә, ауыл ерҙәрендә йәшәүсе ир-ат урологик сирҙәр буйынса тейешле ярҙам ала алмай. Шул арҡала простата биҙе ауырыуҙары йылдан-йыл арта бара һәм 2002-2011 йылдар араһында ул 88 процентҡа барып етә. Ауыл районлары буйынса был күрһәткес төрлөсә тирбәлә. Ҡалала йәшәүсе ир-ат араһында простата биҙе ауырыуҙарын беренсе тапҡыр асыҡлау ошо осорҙа 67 процентҡа үҫкән. Ауыл ерендә йәшәүсе ир-егеттәр араһында түлһеҙлек 100 мең кешегә 1,1-1,9 проценттар араһында тирбәлһә, ҡалалағылар буйынса был күрһәткес 1,5-6,6. Аныҡлап әйткәндә, 41 муниципаль районда йәшәүселәр араһында ошо йылдарҙа простата биҙе ауырыуҙары 100 мең кешегә 316 кеше, дөйөм ауырыуҙар буйынса - 784 кеше теркәлһә, ҡала округында был һандар 464 һәм 1124.

Өс йыл дауамында табип-урологҡа мөрәжәғәт итеүсе ҡала ир-аттарының ауырыуҙарын анализлау шуны күрһәтә: уларҙың 23 процентында пиелонефрит, 12 процентында - теге йәки был ағзаһында таш булыуы, шул уҡ нисбәттә хроник простатит, 7 процентында - простата биҙендә яман булмаған гиперплазия (ағзаның көслө эшсәнлеге йәки патологик яңы туҡымалар барлыҡҡа килеү һөҙөмтәһендә күҙәнәктәр һаны күбәйеү, күҙәнәктәрҙең эске структураһы, күҙәнәк-ара матдәнең епсәләр барлыҡҡа килтереп артыуы). Әммә табипҡа мөрәжәғәт итеүселәрҙең күпселеген өлкән йәштәге ир-ат тәшкил итә. Простата биҙе гиперплазияһы менән мөрәжәғәт итеүселәрҙең уртаса йәше 70,4 булһа, простата биҙенең елһенеү ауырыуҙары менән мөрәжәғәт итеүселәр - 48, хроник простата (простата биҙенең елһенеүе; ир-ат таз тирәһендә ауыртыныу тоя, енси функциялары боҙола һәм бәүел сығыуы ҡатмарлаша) менән - 42 йәш.

✓ ***Балаһыҙҙарҙың күпселеге 20-24 йәшлек (88,2%), 30-34 йәшлектәр араһында был күрһәткес 71,8%. Уларҙың 49 проценты көнөнә уртаса 16,5 дана тәмәке тарта. 81% аҙнаһына бер-ике, айына - 3-4 тапҡыр йәки байрамдарҙа эсә.***



### Атта ла бар, тәртәлә лә…

Ғаилә парҙарының 15 проценттан күберәге түлһеҙ. Былдай ғаиләләрҙә ғәйептең 50 проценты ир-атҡа тура килә. Анализ күрһәтеүенсә лә ир-ат түлһеҙлегенән (ырыуһыҙ булыуы) дауаланыусылар һаны арта. Былдай категория араһында хроник простата менән сирләүселәр - 61, ирҙәр түлһеҙлеге менән - 17,5, простата биҙенең гиперплазияһы менән 12 процент тәшкил итә. Медицина ярҙамына мөрәжәғәт итеүселәрҙең фекерен анализлағандан һуң шундай күренеш асыла: көслө зат репродуктив сәләмәтлек тураһында етерлек кимәлдә хәбәрҙар түгел, уларҙа енси мәҙәниәт түбән, енси тормоштоң төп гигиеналары тураһында мәғлүмәттәре аҙ, контрацепция ҡулланыу урынына яуаплылыҡты ҡатын-ҡыҙға йөкмәтеүҙе ҡулайыраҡ күрәләр, енси юл аша бирелгән йоғошло сирҙәрҙе иҫкәртеүҙең әһәмиәтен аңламайҙар.

Түлһеҙ ирҙәрҙең медик-социаль характеристикаһын күҙаллағанда, тикшереү үтеүселәрҙең күпселеген 25 - 29 йәшлектәр тәшкил итә (27,4 процент), 30-34 йәшлектәр - 36,8 процент. Уларҙың уртаса йәше 32,5 йәш. Былдай бүленеш ир-ат түлһеҙлегенең һуң асыҡланыуы, йәғни медицина ярҙамына һуң мөрәжәғәт итеү менән аңлатыла. Тикшерелеүселәрҙең 81 проценты никахта тора, 15 проценты - икенсе никахта, 1,6 процентының өсөнсө никахы. 63 проценты урта махсус белемле, 22 проценты - юғары белемле, 82 проценты - хеҙмәткәр (етәкселәр, водителдәр, электриктар, слесарҙар, төҙөүселәр, операторҙар, инженерҙар, һаҡ хеҙмәткәрҙәре, юристар һ.б.), 16,5 проценты эш урынында тирбәлеү тойоуын, 20 проценты зарарлы матдәләр йоғонтоһон билдәләй, 24,4 процентының эше даими командировкалар менән бәйле. Респонденттар түлһеҙлек менән яфаланыуына ҡарамаҫтан, уларҙың күпселеге үҙенең сәләмәтлеген, яҡшы, һәйбәт, ҡәнәғәтләнерлек, тип баһалай. Бары тик 1,6 проценты ғына насар тип белдерә. Һорауҙарға яуап биргән 100 ирҙең 18 процентында хроник простатит, 15 процентында - варикоцеле (орлоҡ бауы веналарының варикоз киңәйеүе, күкәйҙә ауыртыу һәм ауырлыҡ тойғоһо булыуы). 31,7 процентының балалары бар, 69,3 проценты - балаһыҙ. Балаһыҙҙарҙың күпселеге 20-24 йәшлек (88,2 процент), 30-34 йәшлектәр араһында был күрһәткес 71,8 процент. Уларҙың 49 проценты көнөнә уртаса 16,5 дана тәмәке тарта. 81 проценты аҙнаһына бер-ике, айына - 3-4 йәки байрамдарҙа ғына эсә. Үҙҙәренең фекеренсә, түлһеҙлеккә бәүел-енес ағзаларының елһенеүе, хеҙмәт шарттары, тирә-яҡ мөхиттең бысраныуы, һалҡын алдырыу, енси юл аша йоҡҡан ауырыуҙар сәбәп булып тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәҡәләлә килтерелгән ошо дәлилдәрҙән һуң ир-аттың үҙ һаулығына артыҡ битараф булыуын аңлағанһығыҙҙыр. Көслө заттарыбыҙҙың үҙ ғаиләһен генә түгел, илен дә яҡлауын теләһәк, уларҙың сәләмәтлеген һаҡлауҙы, бәлки, ҡатын-ҡыҙ үҙ ҡулына алырға тейештер? Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

*ЕҢЕҮСЕЛӘР ХӘТИРӘҺЕ*



# ҺУҒЫШ ЯЛҠЫНЫНДА СЫНЫҠҠАН УҠЫТЫУСЫЛАР

**Атайым 1921 йылда тыуған. Һуғышта иң күп ҡырылған быуындың вәкиле ине ул. Шул йылдарҙа тыуып, һуғышҡа оҙатылған йөҙ егеттең өс-дүрте генә кире әйләнеп ҡайта алды тыуған яҡтарына. Йә ҡулһыҙ, йә аяҡһыҙ, йә күҙһеҙ булды улары ла. "Байымдан һинең атайың Әбдрәхим менән тағы биш егетте һуғышҡа оҙатҡандарын иҫләйем", - тип һөйләп ултырҙы миңә үткән йыл һикһән ете йәштәге Мөхәмәтҡолов Искәнйәр ағай.**
**- Шуларҙан тик һинең атайың ғына яраланып, кире әйләнеп ҡайтты".**

Әбдрәхим Фәруҡ улы уҡытҡан балаларҙың иң йәше бөгөн алтмыш өҫтөндә. 1965 йылдың йәйендә вафат булды ул. Һаҡмар буйында урынлашҡан ике Иҙрис, Ҡолсора, Муллаҡай ауылдарының өлкән быуын кешеләре минең ошо фекер менән килешер: бөгөн уның, уның менән бергә эшләгән Сабур Хәйрулла улы, Ниғмәт Заһит улы, Рәшит Солтан улы, Камил Аллабирҙе улы, Фрик Фазлый улы, Фәрит Әғзәм улы кеүек ир уҡытыусылар күп түгел. Ирәндек битләүҙәрендә ҡасандыр үҫкән мәшһүр ҡарағастар нисек юҡ булһа, тоҡомло уҡытыусылар ҙа тарих төпкөлдәрендә генә тороп ҡалыр, ахырыһы. Ә улар уҡыта белде - быны шул йылдарҙа Муллаҡай йәки Ҡолсора ауылдарында белем алған һәр кем дөрөҫләр.

...Уҡыу бара - физика дәресе. Өҫтәл артында, һыңар күҙе менән уҡыусыларына ҡарсыға кеүек ҡарап, Әбдрәхим Фәруҡ улы ултыра. Быяла күҙе хәрәкәтһеҙ - һәр кемдең артынан күҙәткәндәй тойола ул. Эргәһендә уҡыусыһы яуап бирә. Морат Ҡасимғолов, ҡорамалды ҡулына тотоп, насос нисек эшләгәнен һалмаҡ тауыш менән аңлата. Уны тәүге тапҡыр тыңлап ултырған кеше мотлаҡ уйлар ине: "Был уҡыу алдынғыһылыр, нисек оҫта аңлата!" Ысынында иһә, ул башҡа дәрестәрҙә, тарихты иҫәпкә алмағанда, бер һүҙ ҙә әйтмәй торған уҡыусы. Уҡытыусы һорау бирә: "Морат, һин эскә һурыусы насос тураһында яҡшы итеп һөйләнең. Хәҙер ҡыуыусы насос нисек эшләгәнен һөйлә инде". Морат ҡабаланмай ғына ҡулындағыһын өҫтәлгә һала һәм икенсе ҡорамалды ала. Аңлата башлай. Морат үҙенең бишлеһен алып, урынына ултыра. Өҫтәл эргәһенә Мусина Роза сығып баҫа. Уның гүзәл йөҙө бүлмәне яҡтыртып ебәргәндәй тойола. Шуныһы ғәжәп: ул да насостың нисек эшләгәнен шундай оҫта итеп һөйләй, әйтерһең, ғүмер буйы шуны ғына өйрәнеп йөрөгән.




*Темәс педагогия училищеһенән 1941 йылда тамамлаған уҡытыусылар*

Беҙгә ул йылдарҙа тағы бер яугир уҡытыусы белем бирҙе. Риза ағай Мазһаров булды ул. Әммә ул Әбдрәхим Фәруҡ улы кеүек ҡаты һәм талапсан булманы. Уның дәрестәрендә, йәшерен-батырыны юҡ, шаяра торғайныҡ. Риза ағай һуғыштан башы ҡаты яраланып ҡайтҡан кеше ине. Башының һул яғында, бәләкәй баланың усы аяһы ҙурлыҡ урында, баш һөйәге булмай торғайны уның. Ҡайһы саҡта, беҙгә асыуланһа, шул урын мөлкөлдәп тибә торғайны. Иҫ китмәле йомшаҡ, асыҡ йөҙлө, гел йылмайып йөрөгән уҡытыусы булды ул. Йәне йәннәттә булһын Риза ағайҙың. Уның ысын мөғәллим булыуы хаҡында мин шунан сығып һығымта яһайым: бөтә балалары ла аталары Риза, әсәләре Сәрүәр юлын дауам итеп, уҡытыусы һөнәрен һайланылар. Икенсе улдары Илдус хатта фән докторы булып китте, профессор дәрәжәһенә тиклем күтәрелде.

Муллаҡай ете йыллыҡ мәктәбендә атайымдан бер нисә йыл алда Дан ордендарының тулы кавалеры Әҙеһәм Әлибаев эшләгән. Һуғыштан һуңғы йылдарҙың михнәттәре тураһында үҙенең көндәлектәрендә тәфсилләп яҙа ул. "Ағиҙел" журналының 1971 йылда сыҡҡан 3-сө номерын таба алһағыҙ, ана шунда бирелгән уның көндәлектәренең өҙөктәре. 1947 йылдың 25 мартында Әҙеһәм Әлибаев ошондай мәғлүмәттәр яҙып китә: ондоң килоһы - 55-60 һум, картуфтыҡы 75-80 һум, иттеке 45-50 һум тора. Ябай итек 700, хром итек 1500 һум тора. Үҙенең эш хаҡы иһә 225 һум ғына. Йәғни уҡытыусы дүрт кило он алыу өсөн бер ай эшләргә мәжбүр булған ул саҡта.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры.**

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Аңығыҙҙы уңышҡа көйләгеҙ

**Уңышҡа көйләнеш булдырыуҙың ете төп этабы бар.**

**1. Ҡорбан менталлеген һәм ялған хоҡуҡтар булыуын танығыҙ һәм уларҙан ҡотолоғоҙ.**

Күпселектең терәген һәм аңлауын тойоп, даими рәүештә ҡоллоҡ ҡулсаһына инергә теләйәсәкһегеҙ. Сөнки былдай "дуҫтар" нисек ҡорбанға әйләнеүегеҙ тарихын тыңлаясаҡ һәм хәстәрегеҙҙе уртаҡлашасаҡ. Был һеҙҙе киренән ҡорбан роленә ҡайтара һәм уңышҡа ынтылыу урынына, ҡабат-ҡабат үҙегеҙҙең ни өсөн уңышһыҙ икәнегеҙҙе аҡлап торорға мәжбүр итә. Шулай уҡ ниндәйҙер ялған компенсация, субсидия, махсус хөкүмәт гранты, йәки бай туғандарығыҙҙың һеҙҙе лә мираҫсы исемлегенә индереүе тураһындағы хәбәрҙәргә алданмағыҙ. Әгәр шундай хәбәр ишетәһегеҙ икән, һеҙ ысынлап та шуға хоҡуҡлымын тип уйлай башлаясаҡһығыҙ. Былдай раҫлауҙың ҡиммәттәр алмашыныуына нигеҙләнгән уңыш менән бер ниндәй уртаҡлығы ла юҡ.

**2. Көнсөллөк барлығын танығыҙ һәм унан баш тартығыҙ.**

Әгәр барлыҡ эшмәкәрлеге кешеләрҙе юғары күтәреп, һуңынан юғары баҫҡыстан бәреп төшөрөүгә ҡоролған киң мәғлүмәт саралары йоғонтоһона биреләһегеҙ икән - был тағы ла бер ҡапҡан. Ул кешеләрҙең барлыҡ иғтибарын үҙенә туплай. Шуға күрә, нормаль кешеләрҙе кәмһеткән, үҙеңә ҡарата күрә алмаусылыҡ, шикләнеү һәм көнсөллөк тыуҙырған барлыҡ ошо нәмәләрҙән алыҫтараҡ торорға кәрәк.

Миҫалға Мария Стюартты ғына алайыҡ: ул алыш-биреш эшләгәндә конфиденциаль мәғлүмәтте файҙаланғанмы, юҡмы, миңә ҡараңғы, әммә уның эше буйынса тикшереү барышын, хөкөмдө һәм азат итеүҙе матбуғат оло ҡәнәғәтлек менән, ваҡ-төйәккә иғтибар биреп, көнләшеүен йәшерә алмай яҡтыртты. Хужабикәнең миллиард долларлыҡ капиталы булған компания ойоштороуын репортерҙар һәм башҡа киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре кисерә алманы, шуға күрә улар уны йәмғиәт өсөн оло хәүеф сығанағы итеп күрһәтте, көлкө объектына әйләндерҙе. Эйе, киң мәғлүмәт сараларында уңышлы кешеләр тураһында кире яҡтан донъя күргән мәғлүмәттең барыһын да һеңдереп барырға һәм аҫтыртын ғына ҡәнәғәтлек кисерергә мөмкин, әммә былдай материалдар - яңылыҡтар артына йәшеренгән йәки уңышҡа ҡаршылыҡты символлаштырған ғәйбәт кенә. Кемдеңдер уңышынан көнләшеү ҡурҡыуға нигеҙләнә һәм үҙебеҙҙең уңышыбыҙға юлды яба. Сит кешенең уңышына шатлана белеү мөхәббәт менән тулы була һәм үҙебеҙгә лә уңыш алып килә.

**3. Сикһеҙ уңышҡа өлгәшегеҙ**

Күпселек кеүек, пальто алырғамы йәки аҡсаны мәрхәмәтлелеккә тотонорғамы, тип баш ватаһығыҙ икән, был уй һеҙҙең аҡсаны сикле итеп күреүегеҙҙе аңлата. Әммә был донъяла аҡса күләме лә, башҡа байлыҡ кеүек үк, сикләнмәгән. Мөхәббәт тә, ҡыуаныс та, сәләмәтлек тә һ.б. - сикһеҙ. Шуға күрә аңығыҙҙы дөрөҫ көйләһәгеҙ, уңышығыҙ ҙа, уға бәйле мәрхәмәтлек эшләү мөмкинлегегеҙ ҙә йылдан-йыл артыр.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 30 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (12+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Фарца". 1-я и 2-я серии. Драматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Время покажет" (16+).
02.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 23.35 "Украденные коллекции. По следам "черных антикваров" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Цвет черемухи". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Пепел". Исторический сериал. 1-3-я серии (12+).
00.35 "Гений разведки. Артур Артузов" (12+).
01.35 "Адвокат".
03.00 "Горячая десятка" (12+).
04.05 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
22.00 "Кис ултырып". Ғәзим Ильясов. 2011 йыл (12+)

### БСТ
**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Новости недели" (6+).**
**12.00 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.15 "Акмулла. Возвращение" (12+).**
